ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

7-13 март (буранай) 2015

№ 10 (636)

kiskeufa.ru • blog.kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы иреклe

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**XX быуат башында...**

мосолман ҡатын-ҡыҙҙары ойошмалары



7

**Бәҫле, ҡыйбатлы булһын кейемебеҙ -**



беҙ бит күкрәген саф көмөш, саф гәүһәр менән биҙәгән ҡатын-ҡыҙ тоҡомо

8-9

**Баймаҡтанмы?..**

Өфөгәме?.. Саңғыламы?..



11

**Ялҡау булмайыҡ!**



12

**ТВ-программа** 14

***Мөхтәрәм уҡыусыларыбыҙ!***

***31 мартҡа тиклем быйылғы йылдың икенсе яртыһы өсөн 50665 индекслы "Киске Өфө"гә ваҡытынан алда яҙылыу бара. Ташламалы хаҡ 513 һум 72 тин тәшкил итә. Апрелдә хаҡтарҙың артыу ихтималлығын күҙ уңында тотоп, гәзитебеҙгә әле үк яҙылып ҡуйырға кәңәш итәбеҙ. Мартта гәзитебеҙгә яҙҙырып, квитанцияларын редакциябыҙға ебәргән уҡыусыларыбыҙ араһынан кемдәрҙер "400 башҡорт халыҡ йыры", "Антология поэзии Башкортостана", "История сели деревень Башкортостана" китаптарын алып ҡыуаныуы ихтимал. Әйҙәгеҙ, кем алыҡ?***

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Бизмән менән гер бергә... ҡатын менән ир бергә

***Рәүеф БИКТАШЕВ, хаҡлы ялдағы уҡытыусы:*** Халҡыбыҙ нимә әйтһә лә, күп йыллыҡ тормош күҙәтеүҙәренән сығып, бик тә хаҡ әйткән, бер нәмәне лә уйлап сығармаған. Ысынлап та, ҡайҙа бизмән - шунда гер, айырым-айырым уларҙың бер нәмәгә лә кәрәге юҡ. Бизмән бурысын гер үтәй алмаған кеүек, бизмән дә гер була алмай. Бергә булғанда ғына улар файҙалы, мәғәнәле эш башҡара ала. Ир менән ҡатын да бит шулай бер-береһен тулыландырып, тормоштарын байытып, уға мәғәнә өҫтәп, уртаҡ маҡсаттарға хеҙмәт итеп йәшәй. Әйткәндәй, бик образлы сағыштырыу.

Ҡатыным Әминә Мөхәмәтвәли ҡыҙы менән ярты быуаттан ашыу бергә ғүмер кисереп, беҙ күптән ана шул "бизмән менән гер" булып бөткәнбеҙ инде. Был йәһәттән ҡасандыр тормош юлдарыбыҙҙы киҫештереп, яҙмыш бик ҙур бүләк эшләгән, тием икебеҙгә лә, сөнки бер уйлы, бер маҡсатлы булып, бер-берендe һүҙһеҙ ҙә аңлап йәшәү өсөн үҙ тиңеңде табыу мөһим. Ә кем ул, ниндәй була һуң үҙ тиңең? Иң беренсе һәм мотлаҡ шарт тип уйлайым, ул - үҙ милләтең кешеһе. Дөрөҫ, булып алды заманында ата-бабаларыбыҙҙың был аманатына хыянат, тик интернациональ тәрбиә һәм халыҡ-ара толерантлыҡты бының менән генә нығытып булмаясағын да аңланыҡ инде хәҙер. Ологая килә, бындай "интернациональ" ғаилә барыбер тарҡалыуға дусар була, сөнки йылдар үтеп, йәш өҫтәлә килгән һайын, кеше тыуған тамырҙарын барлай, асылына ҡайта башлай. Ике төрлө милләт вәкиле булған ир менән ҡатын, шулай итеп, һәр береһе үҙ донъяһына бикләнә, үҙ мәнфәғәттәрен ҡайыра. Бер ҡыйыҡ аҫтында ҡалған хәлдә лә, уларҙы рухи береккән кешеләр тип атап булмаясаҡ инде.

Икенсе шарт - рухи-мәҙәни кимәлдәрҙең тап килеүе. Был яҡтан да ҡатыным менән тап килештек: икебеҙ ҙә юғары белемгә эйә, икебеҙ ҙә уҡытыусы. Уртаҡ бурыстар икәүебеҙгә лә бер йүнәлештә һәм фәҡәт алға ҡарап йәшәргә, эшләргә мөмкинлек бирҙе. Балаларыбыҙға ата-әсә булараҡ ҡына түгел, уҡытыусылар булараҡ та тәрбиә биреүгә өлгәштек. Уларҙың береһе лә йөҙөбөҙгә ҡыҙыллыҡ килтермәне: бөтәһе лә юғары белемле белгестәр булып, илгә файҙалы эш башҡаралар, үҙ балаларына лайыҡлы тәрбиә бирәләр.

Өсөнсөнән, ҡатыным менән икебеҙ ҙә иманлы, динле атаәсәле булып, әхлаҡ нигеҙҙәре буйынса тәрбиәләнгән парҙар булып сыҡтыҡ. Был да ифрат мөһим. Ғаиләлә ата-әсәнең бер-береһенә мөнәсәбәте артабан балалары холҡона күсә. Ниндәй генә осраҡта ла балалар алдында йәмһеҙ итеп мөнәсәбәттәр асыҡлауға юл ҡуйырға ярамай. Шөкөр, ғаиләбеҙҙә әрепләшеү тигән нәмәнең ни икәнен дә белмәнек. Беҙҙең заман уҡытыусыларының мәҙәни кимәле барыбер ҙа юғары булған, тип әйтергә батырсылыҡ итәм. Был маҡтаныу түгел. Быға дәлил - минең ғаиләм.

***Мөкәрәмә САДИҠОВА, яҙыусы:*** Был әйтемдә идеаль ғаиләнең ниндәй булырға тейешлеге бик матур әйтеп бирелгән: гел бергә булыу; тән яҡынлығынан бигерәк йән яҡынлығы, рухи берҙәмлек мәғәнәһе лә һалынған. Дөрөҫ, берҙәмлек булғанда ғына ғаиләнең киләсәге бар. Икең ике тарафҡа ҡарап йәшәү тормош түгел инде ул. Ир хаҡы бар, кәрәккән-кәрәкмәгәнгә уның алдына сығып, үҙеңдекен иҫбатлау, хаҡлы булһаң да хатта, яраған эш түгел-түгеллеккә. Аҡыл көсө булып та барыбер үҙенекен иҫбатлай алмай йыш ҡына ҡатын-ҡыҙ. Ир кеше үҙ һүҙенең аҫта ҡалыуын ғәфү итә буламы һуң "көсһөҙ" затҡа! Юғиһә, ирҙә тағы ла бер "инандырыусы" дәлил - йоҙроҡ барлығын да онотоп китмәһен, тим, ҡатын-ҡыҙ. Хәйер, хәҙерге ҡатындар бындай "диалог" менән килешеп йәшәргә лә теләмәй. Бер хәҙистә кәңәш ителгәнсә, ауыҙын яулыҡ менән бәйләп, ире нимә тиһә, шуға риза булып торған ҡатын-ҡыҙ заманы түгел шул хәҙер. Ундайҙарҙы әрепләп, яманлап та булмай. Көс ҡулланыу, мәжбүрләү һәр саҡ ҡаршылыҡҡа ғына осрай. Белмәйем, барҙыр, бәлки, ир йә ҡатындың береһе үтә аҡыллы булып, икенсе яртыһына ыңғай йоғонтоһо, аҡыл көсө менән тәрбиә бирә алғандар... Әлеге мәҡәлде шундай осраҡҡа ҡарата ғына ҡулланырға мөмкин булыр ине, бәлки.

**(Дауамы 2-се биттә).**

ШАҒИР ҺҮҘЕ




## БАШҠОРТ ҠЫҘЫНА

*Йырҙар кеүек, йылдар йырлаҙалар.*
*Йыл түрендә - башҡорт ҡатыны.*
*Ул тарата быуат-быуат буйы*
*йөрәгенә йыйған яҡтыны.*
*Ул Шәрифә Тимерғәлинамы?*
*Ниҙәр һөйләй әле бик алсаҡ:*
*"Мәңге йәшел ерҙә тыумағанбыҙ,*
*мәңге йәшлек иле буласаҡ!"*
*Һәҙиәлер, бәлки,*
*Дәүләтшина - уйҙарына тоғро ҙур кеше.*
*"Ырғыҙ"ына - ғәзиз ил ҡыҙына*
*бар мираҫы - йөрәк тибеше.*
*Кем ул? Зәйнәп Биишева мәллә?*
*Аҫыл томдар, улдар инәһе.*
*Өйрәтәме талант ишегенә нисек*
*талап биген асып инәһен.*
*Гөлнәзирә - Туйсинамы әллә -*
*ҡына гөлдәй күркәм ҡыҙ бала?*
*Алҡышлаһа бөгөн Мәскәү уны,*
*иртәгеһен Милан ҡул саба...*
*Ҡаҙан менән усаҡ хужаһы ғына*
*ул булмаған элек-электән -*
*башҡорт ҡыҙы Йәнтүрәһе менән*
*Парижғаса йәнәш елдерткән.*
*Уңғанлыҡта Батырова кеүек,*
*берсә Үлмәҫбикә кеүек ул.*
*Тыуған Ватан кеүек киң күңелле,*
*Тыуған Ватан кеүек бөйөк ул.*

12+

УҠЫУСЫ ФЕКЕРЕ

# КҮҢЕЛ БУШЛЫҒЫН ТУЛТЫРЫУСЫ...

## рухи аҙыҡ таратыусы

**Ер шарында күпме ил, ҡала, ауыл һәм йорт бар - шуларҙың һәр береһенә тиерлек көн дә, көн аша йәки аҙна һайын ниндәй ҙә булһа гәзит-журнал килә. Берәүҙәр үҙе йәшәгән төбәктең генә ваҡытлы матбуғатын күҙәтеп барырға күнекһә, икенселәр мәғлүмәтте бер-нисә ваҡытлы матбуғат сараһынан ала. Сифатлы һәм абруйлы гәзит - алыҫ юлдан сарсап килгәндә йәшәү көсө биргән сылтыр шишмә кеүек, кешегә рухи аҙыҡ таратыусы, күңел бушлығын тултырыусы, дарман өҫтәүсе, аңды үҫтереүсе сығанаҡтарҙың береһе.**

Нәҡ ошондай сифаттарға эйә яратҡан һәм хөрмәт иткән гәзитем - "Киске Өфө"м. Шәмбе көн буяу еҫе лә таралып бөтмәгән, ҡыштырлап торған гәзитте ҡулыма алыуым үҙе бер байрам кеүек. Өйгә индергәс тә, гәзит биттәрен тиҙ генә ҡараштырып сығам, рубрикаларға күҙ йөрөтәм, фотолар менән танышам. Унан инде "тәмләп" кенә үҙемдең күңелгә хуш килгән битте асып уҡый башлайым. Бик тә оҡшаған урындарын, "Һуңынан үҙебеҙ уҡырбыҙ", тиеүҙәренә ҡарамай, өйҙәгеләргә ҡысҡырып уҡып та ташлайым әле. Ҡайһы бер мәҡәләләр шул тиклем актуаль, урынлы һәм йәнле итеп яҙыла, ҡат-ҡат уҡымайынса күңел булмай инде шул. Замана талабына яуап биргән, көнүҙәк мәсьәләләргә күп урын бүлгән, әҙәпле, уҡыусыларына ысын дуҫ булыуға өлгәшкән гәзитебеҙ булыуына ҡыуанам. "Киске Өфө" артабан да мещанлыҡ һаҙлығына батыуҙан ҡурсалаусы, мин-минлек тойғоһо быуманһына эләгеүҙән әрсәләүсе, йәмғиәт мәнфәғәтенә, ихтыяжына иғтибарҙы йәлеп итеүсе баҫма булып ҡалырына ышанам.

Беҙ - ауыл хужалығы киң үҫешкән төбәк, шуға күрә ошо йүнәлеште яҡтыртҡан мәҡәләләргә лә иғтибар күберәк бүленһә ине, тигән теләктәмен. Мәҫәлән, "Фенолог яҙмалары" рубрикаһын яратып уҡыйым һәм гәзиттә сығыш яһаған "халыҡ метеорологтары"ның яҙмаларынан илһамланып, үҙем дә тәбиғәт күренештәре, һауа торошо тураһында мәғлүмәтте теркәй башланым. Шулай уҡ йыл да республиканы хафаға һалған төрлө бөжәктәр тураһында, улар менән көрәшеү юлдары хаҡында махсус белемле ауыл хужалығы белгестәренең кәңәштәрен ишетеү файҙалы булыр ине.

Мин тарихты яратам. Үҙемдең тыуған ауылым, районым, республиканың башҡа төбәктәре тураһындағы мәғлүмәтте һәр саҡ ҡыҙыҡһыныу менән уҡыйым. Гәзиттә Башҡортостандағы бөтә ауыл-ҡалаларҙың үткәне хаҡында яҙып булмаһа ла, баш ҡалабыҙ Өфөгә ҡағылышлы тарихтарҙы бәләкәй генә итеп булһа ла биреп барыуығыҙ ҙа күптәрҙең күңеленә хуш килер, тип уйлайым. Шулай уҡ ҡаланың төрлө урындарын һынландырған фотоһүрәттәр ҙә урынлы булыр ине.

Ижтимағи-сәйәси-мәҙәни гәзит булараҡ, илдәге, донъялағы сәйәсәт тураһында ла күберәк материалдар күреүемә шат буласаҡмын.

**Салауат ИШКИНИН.**
**Салауат районы.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

# *Бизмән менән гер бергә... ҡатын менән ир бергә*



**(Башы 1-се биттә).**

***Фәтих МУЛЛАҒОЛОВ, эшсе:*** Тәүҙ ҡарашҡа ябай ғына тойолһа ла, уйлай башлаһаң, фекер ебенең осона сығып булмай халыҡ мәҡәлдәренең. Шуның өсөн дә быуаттан-быуатҡа, быуындан-быуынға күсеп, бизмәндең үҙе лә, гер тигән нәмә лә тороп ҡалмаған быуатҡаса килеп еткәндер инде ул халыҡ һүҙе. Бизмән менән герҙең нимә икәнен дә белмәгәндәр етерлек беҙҙең көндәрҙә, тик бының менән генә халыҡ һынамышы мәғәнәһен һис юғалтмай, киреһенсә, унан боронғолоҡ "еҫе" аңҡып, аҡыл һәлмәклеге тағы ла тосораҡ тойола кеүек. Ҡатын менән ир берҙәмлеге иң тәүҙә татыулыҡта күренә инде ул. Татыу ғаиләлә килеп тыуған берәй сетерекле мәсьәләнән сығыу юлы бергәләп хәл ителә. Ир фекеренә өҫтөнлөк биреү йолаһын бер кем дә юҡҡа сығармаған, тик бына уның ниндәй ир булыуы ғына һорау тыуҙырыуы ихтимал. Холҡо яман, ҡыҙыу, үҙен генә хаҡлы иҫәпләгән ирҙең һүҙе кемгә хәжәт ошонан?.. Әйткәндәй, ҡатындарҙың да төрлөһө бар. Ирен "каблук" аҫтында тотҡан зәһәр бисәләр байтаҡ, тик шуныһы ла бар: был мәҡәл ундайҙарҙы күҙҙә лә тотмай, ахыры. Был икенсерәк, әҙәмсәрәк ғаиләләргә ҡағылалыр, тип уйлайым. "Ҡатын менән ир бергә" тип әйтеү үҙе үк уларҙың төптән бер һүҙле, бер уйлы, тимәк, татыу булырға тейешлеген әйтеп тора. Ҡайһы саҡ килеп сығыусан фекер айырымлыҡтарын да килешеп, көслөрәк, хаҡлыраҡ дәлилгә юл биреүҙе лә күҙҙә тота ул. Ирҙе ир итеп, уны йөпләп, ыңғайға көйләп, яҡшы ғәмәлдәргә дәртләндереү иллә мәгәр аҡыллы ҡатындың ғына көсөнән киләлер, тигән уйҙамын үҙемә ҡалһа. Бар ундай ҡатындар, мин уларға һоҡланам ғына. Үҙемдең әсәйем, мәҫәлән, тап ана шундай ҡатын ине. Бынан уның бер ере лә кәмемәне, бер нәмәһе лә төшөп ҡалманы, киреһенсә, абруйы ғына артты. Ире, балалары һәм дә барлыҡ ғәм алдында.

Мәҡәлде тура мәғәнәлә ҡабул итеп, берҙәм һәм татыулыҡтарын кешегә күрһәтеп йөрөүселәр ҙә бар, әйткәндәй. Ир генә булаһы ергә - ҡатыны менән, ҡатын ғына булыр ергә ире менән тағылышып, эйәртенешеп йөрөүҙе бер ҙә генә хуплап булмай, әйтәгүр. Бының башҡаларҙа көлкө йә асыу тыуҙырыуы ғына бар. Мәҡәлгә лә, ул ҡуйған мәсьәләгә лә төптәнерәк ҡарау кәрәк, йәмәғәт.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА**
**яҙып алды.**

ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда, майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



# ИМАНЛЫ БУЛЫУҘАН ОЯЛМАЙЫҠ!

**Зөлфиә ХАННАНОВА, шағирә:** Яңыраҡ Бишбүләк районы ағинәйҙәрендә ҡунаҡта булып ҡайттыҡ. Өфөнән Бикҡол ауылына күсеп ҡайтҡан Сөмбөл Әсфәндийәрова матур итеп дин дәрестәре үткәрә башлаған икән. Намаҙҙа кәрәкле сүрәләрҙе өйрәндек, ғәрәп хәрефтәрен дә таныйбыҙ хәҙер, тип ҡыуаныстары менән бүлеште бишбүләктәр. "Дингә кеше төрлө юл менән килә, - тип һүҙ башланы ғәжәйеп мөләйем йөҙлө, сабыр ҡарашлы бер ҡатын.- Стәрлетамаҡ ҡалаһында дауаханала ята инем. Диагнозым: яман шеш ауырыуы. Күңелдә бер ниндәй өмөт саткыһы юҡ, шул тиклем ҡыйын. Палатала ла шундай уҡ ауырыуҙар. Күреп ятам: христиан динендәге ауырыуҙар янына әленән-әле поптар килеп китә: доғалар уҡыйҙар, Пасха кеүек байрамдары үтһә, күстәнәс-бүләктәрен дә килтереп тараталар. Улар килеп ҡайтҡас, ауырыуҙарҙың күҙҙәре нурланып китә. "Их, нинә беҙҙең муллалар килеп, "Ҡөрьән" уҡып китмәй икән?" тип уфтанам. Фамилиям Исламова була тороп, суҡынып ята алмайым бит инде мин, тип илайым. "Ә һин үҙегеҙҙең доғаларҙы уҡы эсеңдән генә!" - тип йыуатҡан була мәрйәләр. Исмаһам, бер доға белһәмсе, янымда берәй китап булһасы! Шул саҡ, ошо ауырыуымдан йүнәлә алһам, үҙ аяҡтарым менән мәсеткә йөрөр инем, тип һүҙ бирҙем. Эргәмдә бер мосолман әбейе ята ине. Күрәм: сынаяғына ниндәйҙер сүрә яҙылған. "Әбекәй, сынаяғыңды яҙыулы яғы менән минең яҡҡа әйләндереп кенә ҡуйһаңсы..." - тип үтенәм. Үҙемдең тороп йөрөрлөк тә хәл юҡ. Ауыҙымды саҡ ҡыбырлатып, сынаяҡ тышында яҙылған доғаны бер туҡтауһыҙ ҡабатлап ятам: Бисмилләәһир-рахмәәнир-рахиим. Әлхәмдү лилләәһи рабблилғәәләмиин. Әррахмәәнир-рахиим..." Аҙаҡ белеүемсә, "Фатиха" сүрәһе булып сыҡты ул. Аллаға шөкөр, химик терапияларҙы үткәреп, аяҡҡа баҫтым. Ҙур теләк менән Ислам дине ҡанундарын өйрәнәм, үҙ аяҡтарым менән мәсеткә йөрөйөм..."

Ошо тарихты әленән-әле иҫемә төшөрөп, уйланып йөрөйөм һуңғы арала. Берәй кеше сирләп китһә, уҡый белгән кешеләрҙе саҡыртып, "Йәсин" сығарыр ине боронғолар. Ауырыуҙарға хәл инә, тиҙерәк терелә, әхирәткә күсә торғандары иһә еңеллек менән әхирәткә күсә, тип аңлатырҙар ине. Әле лә саҡырған ергә барып, ауырыуҙар эргәһендә шифалы доғаларын уҡыған хәҙрәттәрҙе белә-күрә йөрөйөм. Айырым бер дауахана буйынса ғына бөтәһе тураһында ла бер иш итеп фекер йөрөтөп булмай. Унан һуң, мосолман динендәге ҡәрҙәштәребеҙгә сәйерһенеп ҡараған етәкселәр ҙә бихисап бит хәҙер. Бөгөнгө көндә хатта яулыҡлы мөслимәләргә ҡарағанда, әхлаҡи яҡтан тотороҡаһы булмаған, эскене ятҡан кешеләргә эшкә урынлашыуы күпкә еңелерәк. Улай ғына ла түгел,

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✔ Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов республикала дәүләт милли сәйәсәтен тормошҡа ашырыу буйынса саралар тураһындағы Указға ҡул ҡуйҙы. Указға ярашлы, республиканың Мәҙәниәт министрлығына 2015 йылдың 1 июленә тиклем 2016-2020 йылдарға "Башҡортостан Республикаһында Рәсәй милләтенең берҙәмлеген һәм халыҡтарҙың этномәҙәни үҫешен нығытыу" дәүләт программаһын әҙерләргә ҡушылды. Шулай уҡ республикала дәүләт милли сәйәсәтен ғәмәлгә ашырыуҙы камиллаштырыу маҡсатында Башҡортостан Башлығы 2015 йылдың апрелендә Өфөлә Башҡортостан халыҡтары ассамблеяһының өсөнсө съезын үткәреү хаҡындағы бойороҡҡа ҡул ҡуйҙы.

✔ 2015 йылдың апрель-май айҙарында Еңеүҙең 70 йыллығы айҡанлы Башҡортостанда йәшәүсе ветерандарға мең һум күләмендә аҡса түләнәсәк. Тейешле указға Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов ҡул ҡуйҙы. Күрһәтелгән сумма Бөйөк Ватан һуғышында ҡатнашыусыларға һәм инвалидтарға, концлагерь тотҡондарына һәм "Блокадалы Ленинградта йәшәүсе" билдәһе менән бүләкләнеүселәргә бирелә.

✔ Өфөлә республиканың муниципаль район һәм ҡала округтары хакимиәттәре башлыҡтары өсөн семинар ойошторолдо. Муниципалитет етәкселәре алдында Башҡортостан Республикаһы Башлығы, республика Хөкүмәте ағзалары, министрлыҡ һәм ведомство башлыҡтары, саҡырылған эксперттар сығыш яһаны. Көн тәртибендә - биләмәләрҙең социаль-иҡтисади һәм ижтимағи-сәйәси үҫешенең мөһим мәсьәләләре.

✔ Өфөлә Ғәзиз Әлмөхәмәтов исемендәге "Мираҫ" республика мәҙәниәттәр фестивале үтте. Сара Башҡортостандың ЮНЕСКО эштәре буйынса комитеты һәм Мәҙәниәт министрлығы яҡлауында Ғәзиз Әлмөхәмәтов исемендәге Республика гимназия-интернатында уҙғарылды. Фестивалдең төп маҡсаты - һәләтле йәш башҡарыусыларға һәм ижади коллективтарға булышлыҡ итеү, Башҡортостан халыҡтарының мәҙәни мираҫын һаҡлау һәм мәҙәниәтте, әҙәбиәтте үҫтереүгә ярҙам күрһәтеү.

*КИЛЕШМӘЙЕМ!*

# АТТЫҢ ШӘБЕ - КЕШЕЛӘ...

## ҡатын шәбе - күршелә



**Башҡорт мәҡәлдәре һәм әйтемдәре халҡыбыҙҙың иҫ китмәле тел байлығы, сәсәнлеге тураһында ғына һөйләп ҡалмай, бәлки, уның зирәклеге, күҙәтеүсәнлеге, дөйөмләштереү һәләте - ҡыҫҡаһы, аҡыл эйәһе, психолог булыуын да дәлилләп тора. Әлеге мәҡәлдә булғандың ҡәҙерен һанламау, үҙ өлөшөнә төшкән көмөшөнә шөкөр итә белмәү, көнсөллөк кеүек сифаттарға ишара бар.**

"Күршенең тауығы - ҡаҙ-ҙай, бисәһе - ҡыҙҙай" тигән кеүек, "Аттың да шәбе - кешелә, ә ҡатындың шәбе - күршелә" булып сыға ундайҙарға. Донъя көтөүгә дәрте самалы, елкәһе йоҡа кеше, ғәҙәттә, ана шулай ситтәрҙең донъяһына йыш күҙ һалыусан, кеше уңышынан көнләшеүсән була. Кешенең малы, донъяһы, ә күршеһенең ҡатыны шәп, матур булып тойола көнсөлгә. Әгәр кеше холоҡғәҙәте менән көнсөлдән бигерәк сәмсел булһа, быны ыңғай сифатҡа иҫәпләп тә булалыр, бәлки, сөнки сәмләнеү тойғоһо кешегә ярыш ҡомары - позитив уй-ниәт тә өҫтәмәй ҡалмай. Ә был үҙ сиратында өлгө, эталон тойолған яҡшыға тиңләшеү, хатта уны уҙҙырып ебәреү өсөн стимул ғына буласаҡ. Ә инде кеше, киреһенсә, ҡара көнсөл икән, был осраҡта сәм түгел, ә көнсөллөк яман бер сиргә әүерелеп, булғанды ла юҡҡа сығарыу хәүефен тыуҙыра. Баҫалҡылығы күҙгә ташланып торған мөләйем бер ҡатын - осраҡлы юлдашым Ғәлиә үҙ яҙмышын бәйән иткәндә әйтеп һалғайны әлеге мәҡәлде: "... ҡатын шәбе - күршелә"... Иренең дуҫы Түбәнге Камала эшләп йөрөгән еренән бисәһен эйәртеп яңғыҙ ҡалған әсәһен ҡарарға ҡайтып төшкәс башлана ла инде Ғәлиәнең тормош касафаттары. "Кешенән бер ҙә кәм йәшәмәй инек. Булғанын, ир тапҡанын ғына аш итеп, өйҙә лә ултырманым, балалар баҡсаһында, унан мәктәптә ашнаҡсы булып эшләнем. Ирем атаһынан ҡалған техникала кешегә утынбесән, йөк ташыны, ер һөрҙө. Әлеге дуҫы "оҙон аҡса" артынан ситкә йөрөүҙән бушаманы, ҡайҙа, ни эшләп йөрөгәнен дә белмәнек. Шулай бер саҡ дуҫы сирләп китеп, дауаханаға эләккәс, ярҙам йөҙөнән картуфлыҡ ерҙәрен һөрөргә барып, "180 градусҡа" үҙгәреп ҡайтты ла ҡуйҙы ирем. Һуҡмышлығы ла ярайһы ине: дуҫының ҡатыны, был аҡса алмағас, шәп кенә һыйлап сығарған үҙен. Ҡайтты ла маҡтарға керешә бит теге ҡатынды: ул, йәнәһе, беҙҙекеләргә (ситтән килгәнлегенә ишара) һис оҡшамаған: матур, иркә һүҙҙәре менән эс-бауырға инеп бара; ул уңғанлығы, ул килеш-килбәте...Хатта ир башы менән "сибәркәйҙең" кәүҙәһенә һылашып торған асыҡ түшле күлдәгенә тиклем ауыҙ һыуы ҡороп маҡтай был. Ярай, өндәшмәй үткәреп ебәрҙем, айыҡҡас, онот булыр әле, тием үҙемсә. Ә юҡ, башланыуы ғына булған икән... Шул көндән мине дуҫы ҡатынына сағыштырып әрепләүҙәр йышайғандан-йышайҙы: "Ана, Рәзиләнең баҡсаһын барып ҡара: гөрләп үҫеп ултыра", "Икмәгең уңмаған - Рәзиләнән барып өйрән бешерергә", "Тоҡ шикелле күлдәк кейеп алған - Рәзиләнең күлдәген ҡара!"

Бик әйтергә тел ҡыҫыта ине шул саҡ: "Ә һин дуҫыңа ҡара ла үҙеңә күҙ һал: аҡса эшләйем, тип, сирләшкәгә әйләнгән ирен ниңә яҡшылап ҡарамай һуң ул "сибәр" ҡатын, улай шәп булғас?" Түҙемлектең дә сиге була икән. Күрше ҡатынын маҡтап, мине кәмһетеүҙәр иремдең теленән ҡулына күсә башлағас, башҡаса бындай тормош менән килешмәнем: баламды етәкләнем дә күтәрә һуғып сыҡтым да киттем. Район үҙәгенә барып, эшкә урынлаштым, яңғыҙ ғына бер әбей ҡыуанып өйөнә индерҙе. Бер аҙҙан ишетәм: ирҙең дуҫы больницала байтаҡ ҡына ятып, операция яһатып, инвалид булып сыҡҡас, теге "сибәркәй" торламаған ауылда: ирен ташлап, тыуған яҡтарына ҡайтып киткән..."

Ғәлиәнең артабанғы яҙмышын белмәйем: телефон да, адрестар ҙа алышманыҡ, тик шуны аңланым: ул юғалып ҡалмаҫ, сөнки үҙ-үҙеңә, тормош принциптарыңа тоғролоҡ бер ҡасан да ҡырын юлға баҫтырмай. Ә бына "Ҡайҙалыр алтын бар, тиҙәр..." тигән иллюзияға ышанып, йәшәү ҡиммәттәрен бутап көн итеүселәр генә баҡырҙан да тороп ҡала... Ә бит бар арабыҙҙа "баҡыр"ҙы ла "алтын"ға әйләндереп йәшәгән ир уҙамандары, тик быныһы инде - бөтөнләй башҡа тарих...

**Фирүзә ИШБИРҘИНА.**

намаҙлы икәнендә белеп ҡалһалар, күп таныштарың һине ситтәнерәк урап уҙырға тырыша... Ә улай ҙа тормошондағы иң ҡыйын саҡтарында кеше барыбер Аллаһу Тәғәләгә һыйына. Бары уның ғына ярҙамына өмөт итә.

Беҙҙең ата-бабаларыбыҙ бер ҡасан да динен һатмаған. Көсләп суҡындырыуға ҡаршы көрәшкә күтәрелгән ихтилал башлыҡтарының ҡайһыһын ғына алма, уҡымышлы, әүлиә заттан булған: Садир Сәйет, Түләкәй улы Күсем, Күсем улы Аҡай һ.б. "Дин һәм телебеҙҙе һаҡлауға ғәйрәт көс сарыф итегеҙ. Беҙгә иң насар ҡылыҡтар ошо ике юҫыҡта эшләнәсәк..." - тип яҙып ҡалдырған халҡыбыҙҙың аҫыл улы Әхмәт-Зәки Вәлиди ҙә үҙенең хушлашыу хатында.

Тел, тигәндән, мин биш балалы ғаиләлә үҫтем. Атай-әсәйем дә, олатай-өләсәйҙәрем дә - башҡорттар. Өйҙә тик туған телебеҙҙә һөйләшеп үҫтек. Атай-әсәйемдең 10 ейән-ейәнсәре булды һәм ни аяныс: шуларҙың ни бары өсәүһе генә башҡорт телендә һөйләшә. Ә бит ауылда өй беренсә шул уҡ хәл! Апайымдың "Сыночек!" тип телефондан һөйләшкәнен ишетәм дә йөрәгем өҙөлә... Ике туған тейешле апайымдың кейәүе төрөк милләтле. Үҙ илендә йәшәй. Ә апайым ҡыҙы, ейәне менән Башҡортостанда. "Улыбыҙҙы башҡорт телендә һөйләшергә өйрәтһәгеҙ ине, ул саҡта төрөк теленә лә еңел өйрәнер ине!" тип әйтте кейәүем, "Ничего не знаю! Башҡорт теленән көндәлегендә тик бишлеләр!" тип яуап ҡайтарҙым", - тип, ихлас көлә апайым. Ейәненең башҡортса һөйләшә белмәүенә көлөп кенә ҡарай. Илар урында... Ә бит был барыбыҙҙың да ҡулыбыҙҙан килә торған эш. Туған телебеҙҙе хатта үҙ өйөбөҙҙә лә яҡлай алмайбыҙ икән, беҙҙең ҡәҙеребеҙ бер тинлек.

Тыуған еребеҙ, динебеҙ, телебеҙ хаҡына шаһит үлеме менән киткән ата-бабаларыбыҙҙың рухын рәнйетмәйек! Үҙ телебеҙҙә һөйләшеүҙән, иманлы булыуҙан оялырға ла, кәмһенергә лә кәрәкмәй. Аллаһу Тәғәлә үҙе теләгән өлөшлө бәндәләрен генә иман юлына баҫтыра һәм был Хоҙай Тәғәлә тарафынан бирелгән оло бүләк. Өлөшһөҙ бәндәләрҙән булмайыҡ, милләттәштәр!

*БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР*



# ИРҘӘР АРАҠЫНАН ИҪЕРӘ...

## ҡатындар һүҙҙән иҫерә

**Ир-атҡа "еңелерәк" - араҡыны теләгән минутында һатып алырға мөмкиндәр. Иҫергеләре килгәндән түгелдер, әлбиттә, ә бына шатлыҡты ла, ҡайғыны ла фәҡәт әлеге араҡы менән генә йыуырға һәм йыуанырға күнеккәнгә күрә.**

Мин ғүмер буйы шуны аңлай алманым: ни өсөн бәғзе бер ир-егеткә әлеге шатлыҡ та, хәсрәт тә фәҡәт араҡы йөҙөндә һынлана икән? Ике ошо осраҡта ла реакция бирәү - йыуырға: йә ҡыуанысты, йә ҡайғы һөрөмөн. Араҡыһыҙ ғына хисләнеүҙе лә онотоп бара түгелме беҙҙең көслө "яртылар"? Ҡатын-ҡыҙ яртыһы, ысынлап та, билдәле бер "ярты"ға синоним була бара һымаҡ тойолоп та китә. Кешелектең ысын мәғәнәһендә көслө яртыһы тигән маҡтаулы исемде йөрөтөр өсөн тупаҫ физик көс кенә әҙ икән шул. Тыштан ялтырап, эстән ыуалырға йә шартларға әҙер торған гөптәй шешәгә тартым кәүҙә, һалҡын "быяла" күҙҙәр менән гүзәл заттарығыҙҙы өркөтә башланығыҙ түгелме, ағай-эне? Гүзәл зат, тигәндән, ысынында йөк атына әйләнгән ҡатындар ҙа күнекте, ниһайәт, донъя йөгөн тартырға. Заманы шулай, тип аҡлана ҡайһы бер ир йораты. Эйе, ана шундай уңайлы ғына шаршау артына боҫорға ҡала. Уның ҡарауы, ҡатын-ҡыҙ ап-айыҡ ҡарай тормошҡа. Робот һымаҡ, көн дә бер үк юл, бер үк эш, бер үк кәстрүл..."Гөлт" итеп сәскә атырға, йүгерә-йырлай эштән ҡайтырға, яртыларҙы яртынан айырырға, илереп, иләҫләнеп алырға әлеге мәҡәлдәге йылы һүҙ етмәйҙер, ахыры, гүзәл заттарыбыҙға.

Иремдең эскән саҡтарында ғына асылып китеп, наҙлы, яғымлы һүҙҙәр әйтеүе һарыуҙы ғына ҡайната, сөнки иҫерек кеше ни һөйләнмәҫ тә, ни ҡыланмаҫ, тип уйлайһың. Һәм, ысынлап та, айығыуы була - алыштырып ҡуйғандай, ҡайтанан тупаҫҡа, "быяла күҙ"гә әйләнә.

Яңыраҡ осрашып һөйләшкәндә, еңгәмдең йонсоған, нурһыҙ күҙҙәренә ҡарап: "Ауырыйһыңмы әллә?" - тигән аптыраулы һорауыма ҡаршы уның: "Сир - йүнһеҙ ир инде, ағайыңды белмәйһеңме әллә... Ғүмер буйы киҫекһеҙ, ҡаты булды, бер йылы һүҙ ишетмәнем ул дошмандан", - тип әрнегәне иҫкә төштө лә аңымды һиҫкәндерҙе. Ағай кешенең электән үк: "Ҡатынды уны ҡаты тотмаһаң, хәҙер елкәңә атланырға тора", - тигәнен ишеткеләй йөрөһәм дә, иғтибар итмәгәнмен, ә улар ана шулай ҡатындарынан бер кәлимә йылы һүҙҙәрен йәлләп, йылдар буйы үҙ өйҙәрендә үҙҙәренә дошман яһаған...

**Зөлфиә ИШКИЛДИНА.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓ШОС һәм БРИКС саммиттарын транспорт менән "Башавтотранс" предприятиеһы тәьмин итәсәк. Өфөлә дәүләт башлыҡтарын һәм делегация ағзаларын йөрөтөү өсөн 200-ҙән ашыу автобус бүленә. Тимер юл вокзалында һәм аэропортта саммитта ҡатнашыусыларҙы ҡаршы алғанда һәм оҙатҡанда ла дәүләт предприятиеһының автобустары йөрөйәсәк. Аккредитация үткән журналистарға микроавтобустар менән файҙаланыу мөмкинлеге булдырыласаҡ.

✓Ҡырмыҫҡалы районында "Алтын Ҡурай" туристик-эш комплексын төҙөү буйынса проект ғәмәлгә ашырыла. Объект ҡунаҡхана-эш үҙәген һәм 40 милли ихатанан һәм муниципаль берәмек вәкиллектәренән торған "Берҙәмлек" этнографик комплексын үҙ эсенә ала. "Алтын Ҡурай" ҡунаҡхана-эш үҙәгендә конгресс-холл, 400 урынлыҡ ресторан, 160 урынға иҫәпләнгән номер фонды буласаҡ. Әүҙем ял итергә ятарыусылар өсөн парк булдырыла. Комплекс Өфөнән 30 километр алыҫлыҡтағы Тауһеңер күле эргәһендә урынлашасаҡ.

✓Башҡортостан Хөкүмәте 2015 йылда төбәктә биләмәләрҙе таҙартыу, төҙөкләндереү һәм йәшелләндереү буйынса экологик өмәләр үткәреү тураһында ҡарар ҡабул итте. Экологик кампания 11 апрелдән 16 майға тиклем уҙа. Документҡа ярашлы, министрлыҡ, дәүләт комитеты, ведомство, муниципаль район һәм ҡала округтары хакимиәттәренә, профсоюз комитеттарына һәм башҡа йәмәғәт берләшмәләренә үҙ биләмәләрендә сараларҙы үткәреүҙе тәьмин итергә ҡушылды. 8 июнгә таҙартыу, төҙөкләндереү һәм йәшелләндереү буйынса эшкә йомғаҡ яһаласаҡ.

✓Төркиәнең баш ҡалаһы Анкарала мәҙәниәт темаһын яҡтыртҡан төрки донъяһы журналистарын бүләкләү тантанаһы уҙҙы. ТӨРКСОЙ премияһын Әзербайжан, Ҡырғыҙстан, Ҡаҙағстан, Төркиә, Македония һәм Рәсәй республикалары - Башҡортостан, Татарстан, Дағстан, Хакасия вәкилдәре алды. Башҡортостандан халыҡ-ара ТӨРКСОЙ премияһына "Башинформ" мәғлүмәт агентлығының мәҙәниәт буйынса күҙәтеүсеһе Ләйлә Аралбаева (Ишморатова) менән "Башҡортостан" ТРК ДУПһы продюсеры, алып барыусы Гөлназ Яҡупова лайыҡ булды.

**“Башинформ”дан.**

...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

# ӨФӨ МӘКТӘПТӘРЕ ӨЛГӨҺӨ

**Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы урынбаҫары Сынтимер Баязитов журналистар менән матбуғат конференцияһында баш ҡала мәғариф учреждениеларының 2014 йылғы эш һөҙөмтәләренә йомғаҡ яһаны.**

Сынтимер Биктимер улы мәктәпкәсә, дөйөм һәм өҫтәмә белем биреү учреждениелары эшенә айырым туҡталды. Әлеге көндә Өфөлә мәктәпкәсә белем биреү программаһы 245 учреждениела тормошҡа ашырыла. Шул иҫәптән, 11 шәхси балалар баҡсаһы уңышлы эшләп килә. 2014 йылда ҡаланың Октябрь һәм Орджоникидзе райондарында 406 урынлыҡ ике балалар баҡсаһы бинаһы төҙөлгән, федераль бюджеттан бүленгән 100 миллиондан артыҡ субсидия ярҙамында 18 учреждениеға капиталь ремонт яһалған һәм яңы ҡорамалдар һатып алынған. Шулай уҡ Өфөлә балаларға белем биреүҙе ойоштороуҙың альтернатив формалары ла яҡшы үҫешә. Бөгөн 3 меңдән артыҡ бала шәхси балалар баҡсаһына йөрөй, 95 шәхси эшҡыуар ата-әсәләре эштә саҡта балаларҙы ҡарап, тәрбиәләп тороу буйынса ярҙам күрһәтә.

Дөйөм белем биреү учреждениелары эшендә лә өлгәшкән уңыштар байтаҡ. Мөмкинлектәре сикләнгән балаларҙың хәлен еңеләйтеүҙе күҙҙә тотҡан "Уңайлы мөхит" федераль программаһына ярашлы атҡарылған эштәр сиктәрендә 2014 йылда бөтәһе 17 мәктәпкә матди-техник яҡтан ярҙам күрһәтелгән, унда мөмкинлектәре сикләнгән 1836, инвалидлығы булған 714 бала уҡырға барған. Быйыл тағы ла 38 мәктәптә шундай шарттар тыуҙырыу күҙ уңында тотола. Сынтимер Биктимер улы әйтеүенсә, балаларҙың һаулығын нығытыу, сәләмәт тормош алып барыуға ихтыяж булдырыу ҙа иғтибарҙан ситтә ҡалмай. Әлеге көндә ҡаланың уҡыу йорттарында 250 асыҡ спорт майҙансығы эшләй, утыҙ икеһендә инвесторҙар ярҙамында спорт ҡоролмалары ҡуйылған.

Ҡала мәғариф системаһының төп эш йүнәлештәренең береһе - милли мәктәптәрҙең статусын күтәреү. Был өлкәлә эштәр ниндәй кимәлдә атҡарылыуын 2014 йылғы күрһәткестәр ярҙамында баһаларға мөмкин: "Рәсәйҙең иң яҡшы мәктәбе" Бөтә Рәсәй конкурсында ҡаланың 6 учреждениеһы лауреат исемен алған, ә М. Искужин исемендәге 136-сы Башҡорт лицейы милли инновацион учреждениеларҙың II республика йыйынында иң алдынғы 13 уҡыу йорто рәтенә ингән. Сынтимер Биктимер улы билдәләүенсә, ҡаланың һәр мәғариф учреждениеһы ҡуйылған талаптарға төрлө яҡлап тап килеү, алдынғылар рәтендә булыу маҡсатын алға ҡуйып эшләй.

Сәриә ҒАРИПОВА.

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ҠЫРҒЫҘҘАРҘА ҠУНАҠТА

**Ҡырғыҙстан Республикаһы баш ҡалаһы Бишкәктә Башҡортостан мәҙәниәте һәм фәне көндәре булып үтте. Унда Башҡортостан Республикаһы Башлығы Рөстәм Хәмитов та ҡатнашты һәм төрлө эшлекле осрашыуҙар үткәрҙе.**



Ҡырғыҙстан Республикаһы Президенты Алмазбәк Атамбаев менән осрашыуҙа берлектәге проекттарҙы ғәмәлгә ашырыу буйынса пландар тикшерелде. Алмазбәк Атамбаев халыҡтар араһындағы мәҙәни-тарихи бәйләнештәрҙе иҫәпкә алып, Рәсәй төбәктәре менән тура бәйләнеште яйға һалыуҙың мөһимлеген һыҙыҡ өҫтөнә алды. Рөстәм Хәмитов үҙ сиратында төрлө тармаҡтарҙа, шул иҫәптән ауыл хужалығында берлектәге пландарҙың булыуын билдәләне.

Ҡырғыҙстан Премьер-министры Джоомарт Оторбаев менән осрашыуҙа Башҡортостан Башлығы Рөстәм Хәмитов: "Беҙ аграр өлкәлә үҙ-ара бәйләнештәрҙе нығытырға, республикаға Ҡырғыҙстандан продукциялар килтерергә кәрәклеге хаҡында һүҙ алып барабыҙ. Химия, нефть химияһы тармағындағы мөнәсәбәттәрҙе яйға һалыу зарур. Ҡырғыҙстанда йәки Башҡортостанда берлектәге предприятиелар булдырыу талап ителә", - тип билдәләне.

2014 йыл йомғаҡтары буйынса Башҡортостан менән Ҡырғыҙстан араһындағы тауар әйләнеше 132,2 миллион доллар, шул иҫәптән экспорт - 132 миллион, импорт 0,2 миллион доллар тәшкил иткән. Республиканан Ҡырғыҙстанға нефть продукттары, шулай уҡ ағас эшкәртеү, химия, металлургия һәм аҙыҡ-түлек сәнәғәте продукцияһы ебәрелә. Ҡырғыҙстандан Башҡортостанға электр лампалары килә.

Ҡырғыҙстандағы Башҡортостан мәҙәниәте һәм фәне көндәре саралары Башҡорт киноһы презентацияһы менән асылды. Икенсе көнөнә Ҡырғыҙ һынлы сәнғәт милли музейында республиканың заманса графикаһы күргәҙмәһе асылды. Унда тәҡдим ителгән коллекцияның бер нисәүһе музейға бүләк ителде. Ҡырғыҙ дәүләт филармонияһы фойеһында "Башҡорт халҡының материаль мәҙәниәте", "Башҡортостан - Евразия ынйыһы", шулай уҡ биҙәү-ғәмәли сәнғәт һәм халыҡ кәсептәре өлгөләре күргәҙмәләре ойошторолдо. Республиканы презентациялау һәм Ҡырғыҙстанда Башҡортостан Республикаһы көндәрен тантаналы асыу ҙа ошонда уҡ үтте. М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры, Ф. Ғәскәров исемендәге Халыҡ бейеүҙәре дәүләт академик ансамбле коллективы, Өфө дәүләт сәнғәт академияһы студенттары урындағы халыҡты башҡорт мәҙәниәте менән таныштырҙы. Башҡортостан ғалимдары Ҡырғыҙ милли фәндәр академияһы ғалимдары менән, шулай уҡ ике дәүләттең вуз ректорҙары осрашып, фекер алышты. Былар барыһы ла ике милләт араһындағы хеҙмәттәшлектә нығытыуҙың бер этабы булып, мәҙәниәт, фән, белем биреү өлкәләрендә үҙ-ара тәжрибәләр уртаҡлашыу өсөн яңы мөмкинлектәр асасаҡ.

# ТӘҮГЕҺЕ АСЫЛДЫ...



**Баш ҡаланың Гоголь урамында урынлашҡан "Атола" ҡунаҡханаһы асылды. Ул 8-10 июлдә Өфөлә үтәсәк ШОС һәм БРИКС саммиттарына әҙерлек сиктәрендә төҙөлдө.**

Ун ҡатлы ҡунаҡхананың дөйөм майҙаны - 8,3 мең квадрат метр. Унда 108 бүлмә бар, улар араһында бер урынлыҡ стандарт номерҙар ҙа, президент апартаменттары ла бар. Улар барыһы ла классик стилдә биҙәлгән һәм кәрәкле ҡорамалдар менән йыһазландырылған. Бынан тыш, ҡунаҡтар өсөн 50 урынлыҡ ресторан, 25 кешегә иҫәпләнгән конференция залы эшләй. Машиналар ҡуйыу өсөн ер аҫты һәм ер өҫтөндә урынлашҡан парковкалар бар.

Ҡунаҡхана төҙөүгә индерелгән шәхси инвестициялар күләме 600 млн һумға еткән. Иҫәпләүҙәр буйынса, проект 8-9 йылдан үҙенең хаҡын ҡайтарасаҡ.

# ӘЙҘӘ, ЙҮГЕРӘЙЕК!



**Иң әүҙем өфөләр баш ҡалала йәшәүселәрҙе иртәнсәк бергәләп йүгерергә саҡыра. "Сәләмәт күршеләр" тип аталған үҙенсәлекле флешмоб Өфө ҡала хакимиәтенең Физик культура һәм спорт буйынса комитеты ярҙамында халыҡты спортҡа әүҙемерәк ылыҡтырыу маҡсатында ойоштороla.**

Бергәләп йүгереү һәм күнегеүҙәр эшләү идеяһын Азат Мәһәҙиев тәҡдим иткән. Быны бер ҡыйынлығы ла юҡлығын ул үҙ миҫалында күрһәткән - Һупайлы биҫтәһендә йәшәүселәр көн һайын иртәнге етенсе яртыла Рыльский урамы 8/1 йорто эргәһенә йыйыла һәм бергәләп күнекмәләр яһай. Яңғыҙын йүгереп йөрөгәнгә ҡарағанда, төркөмдә эшләү күпкә күңеллерәк, ти улар. Был башланғысты хәҙер улар башҡа райондарға ла таратмаҡсы. Йыйылыу урынын социаль селтәрҙәр аша билдәләргә лә була.

# ТӘБИҒИ ҮҪЕШ БАР



**Рәсәйҙә һуңғы ике йылда халыҡтың тәбиғи үҫеше күҙәтелә. 2013 йыл һөҙөмтәләре күрһәтеүенсә, Рәсәйҙә 1991 йылдан алып беренсе тапҡыр тыуым үлемдән күберәк булып сыға, ыңғай динамика 2014 йылда ла һаҡлана. Башҡортостан иһә бер нисә йыл рәттән тыуым буйынса илдә бишенсе урында килә. 2014 йылда республикала 60,5 мең бала донъяға килгән.**

Әсәлеккә дәүләт ярҙамы күрһәтеү йәһәтенән үткәрелгән саралар ыңғай һөҙөмтәләргә алып килә. Улар араһында РФ Социаль страховка фонды иң әреһе булып тора. Фондтың Башҡортостан буйынса бүлексәһе былтыр түләгән пособиеларҙың иң ҙур өлөшө әсәлек һәм балалыҡҡа ярҙам итеү өсөн тәғәйенләнгән һәм 5,5 млрд һум тәшкил иткән. 2014 йылда йөклөлөк һәм бала табыу буйынса пособие 34,5 мең ҡатынға түләнгән, уның уртаса суммаһы - 65 мең һумдан ашыуыраҡ. Башҡортостанда йәш ярымға тиклем бала тәрбиәләүсе әсәләрҙең һаны 64 мең. Уларға былтыр түләнгән пособиеның күләме 2 млрд 800 млн һум. Был һандар барыһы ла эшләп йөрөүсе ҡатындарға ҡағыла. Бала тыуғас, бер тапҡыр түләнә торған пособиены 2014 йылда 35,5 мең страховкаланған ата-әсә алған, уның республика буйынса дөйөм күләме 560 млн һум.

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Республика магазиндары кәштәләрендә урында етештерелгән продукттар күбәйә. Эксперттар билдәләүенсә, төрлө кимәлдәге магазиндар Башҡортостанда сығарылған продукттар менән ҡыҙыҡһына башлаған. Мәҫәлән, сауҙа майҙансыҡтарының 90 процентҡа яҡыны урындағы ассортимент менән эшләй. Улар бигерәк тә ҙур булмаған ауыл хужалығы предприятиелары, фермер хужалыҡтары менән хеҙмәттәшлек итә.

✓Сауҙа буйынса дәүләт комитеты күҙаллауынса, аҙыҡ-түлеккә хаҡтар кинәт күтәрелмәйәсәк. Киреһенсә, йәшелсәләргә миҙгелле хаҡтар кәмеүен билдәләй.

✓Башҡорт дәүләт университеты һәм Өфө дәүләт авиация техник университеты - 2015 йылға Бөтә Рәсәй студент берләшмәләре эшмәкәрлеген үҫтереү программалары конкурсында еңеүселәр араһында. Ул Рәсәйҙең Мәғариф һәм фән министрлығы тарафынан үткәрелде. Конкурста 214 вуз ҡатнашты. 126 белем биреү ойошмаһы еңеүсе тип билдәләнде, улар федераль бюджеттан финансланасаҡ.

✓Өфөлә 12 яңы туҡталыш, атап әйткәндә, шуларҙың һигеҙе - Ноғай, Жилин, Чесноковка ҡасабаларында, берәүһе Сочи урамында булдырыла. Ноғайҙа биш туҡталыш: "Хәсәнов бульвары", "Урал батыр урамы" һәм Рощинская урамында "Рощинская", Берҙәмлек урамында "Яңы Өфө" һәм Янтарная (Гәрәбә) урамында шул уҡ исемдәге туҡталыш асыла. Жилин аулында - "Кала яңы урамы" һәм "Кояшҡай" баҡсасылар ширҡәте", Чесноковкала Держава урамында "Чесноковка" сауҙа-сервис комплексы" туҡталыштары барлыҡҡа киләсәк.

✓8 мартта Рәсәй ҡалаларында ҡояштағы әүҙемлек арҡаһында теле- һәм радиосигналдарҙың ваҡытлыса юғалыуы ихтимал. Был хаҡта Рәсәй телевизион һәм радиотапшырыуҙар селтәренең матбуғат хеҙмәтенә һылтанып, "ТАСС" мәғлүмәт агентлыһы хәбәр итә. Экрандарҙа һиҙелер-һиҙелмәҫ ҡамасауҙар барлыҡҡа килеүе ихтимал, әммә ҡояш интерференцияһы иң юғары нөктәгә еткән саҡта теле- һәм радиосигналдар тулыһынса юғалырға мөмкин.

ҮҘЕБЕҘ ХАҠЫНДА ҮҘЕБЕҘ

**Гәзитебеҙҙе сығара башлағандың тәүге йылдарында уҡ редакцияға килеп, баҫмабыҙ тураһында матур фекерҙәрен еткереп, ҡайһы саҡта үҙе лә мәҡәләләрен, шиғырҙарын баҫтырып торған был апайҙы үҙенең тыуған районында, гәзит уҡыусылар менән сираттағы бер осрашыу мәлендә тап иттем.**

# ҒАИЛӘ ҠОРОРҒА ЛА...

## балалар үҫтерергә лә өйрәтәбеҙ

Һөйләшеп киттек. Һүҙ араһында ул: "Мин гәзитте әлегә алдырмай торам, яңы йорт һалабыҙ. Байығас, алдыра башлармын, Алла бирһә", - тине аҡланғандай итеп. Мин ниҙер әйтеп өлгөргәнсе, эргәбеҙҙә баҫып тороусы Гөллирә исемле башҡорт теле уҡытыусыһы: "Ә һин алдыр "Киске Өфө"нө, шунда уҡ байып китерһең. Байығыу, уңышлы булыу рецебы тап ошо гәзиттә лә инде", - тип әйтеп һалмаһынмы! Был тапҡыр яуапҡа һоҡланып та, аптырап та, хуплап та өлгөрмәнем, ситтәрәк беҙҙең һөйләшеү темаһына ҡолаҡ һалып торған йәшерәк бер ҡатын эргәбеҙгә килеп тә баҫты һәм уйынлы-ысынлы итепмелер: "Ә мөхәббәт рецебы бармы һуң "Киске Өфө"лә? Кейәүгә сығырға ине бит әле, кейәүҙәр юҡ..." - тип хәбәр һалды. Уға ла яуап тапты Гөллирә, рәхмәт төшкөрө!



- Ана шул "Киске Өфө"нө уҡымағанға ла кейәүгә сыға алмай йөрөйһөң инде һин! Ғаилә мәсьәләләрендә атай-әсәйегеҙ, олатай-өләсәйҙәрегеҙ бирмәгән һабаҡтарҙы бирә был гәзит. Уны уҡыһаң, үҙебеҙҙең милләттең ғаилә традициялары, ир-егеттәр менән ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙ араһындағы мөнәсәбәттәр тураһында белер инең. Күңелеңдә ысын ир-егет образы һынланыр ине... Юҡһа, сит ил киноларын ҡарап, сит ил журналдары уҡып, шундағы геройҙарҙы, ғаиләләрҙе өлгө итеп алып, кейәүҙәрҙең ете диңгеҙ аръяғынан килерен көтөп тик ятаһығыҙ бит һеҙ, хәҙерге ҡыҙҙар. Күпме ҡыҙҙарыбыҙ шул ялған идеалдарын юллап, ситкә сығып китә, сит милләткә балалар үҫтерә!..

Гөллирәнең был һүҙҙәре "Киске Өфө"гә матур реклама ғына түгел, ә башҡорт ғаиләһе тураһында фекер алышыуға сәбәп булды ла ҡуйҙы. Ҡоробоҙға йыйылыусылар бик оҙаҡ әңгәмәләште гәзитебеҙҙең төп йүнәлеше булған ғаилә, ир менән ҡатын, балалар тәрбиәләү темаһы юҫығында. Тимәк, был тема барыбер ҙә уҡыусылар иғтибарын нығыраҡ йәлеп итә - тағы бер тапҡыр шуға инандырҙы был осрашыу мине.

**ӘЙТКӘНДӘЙ...**

**Гәзит биттәрендә күтәрелгән ғаилә темаһына редакциябыҙ коллективы эсендә лә байтаҡ һөйләшеүҙәр алып барыла, йәштәребеҙ ҡолағына ошо юҫыкта матур кәңәш-төңәштәр һалына. Бөгөнгө көндә әллә күпме ҡыҙҙарыбыҙ башҡорт ғаиләһе ҡороп, декрет отпускыһында ултыра икән, тимәк, әйткәндәребеҙ, яҙғандарыбыҙ үҙебеҙҙең йәштәребеҙ аңына ла һеңә, тәьҫир итә, тигән һүҙ. Мәҫәлән, хеҙмәткәрҙәребеҙ Гөлнәзирә Зәйнуллина - Сафия һәм Асия тигән ҡыҙҙар, Гүзәл Сәғитова - Батырхан, Әмирхан һәм Гөлзифа исемле өс бала, Гүзәл Нәзершина - Илнар менән Заһир исемле улдар, Гөлназ Манапова - Гүзәл исемле, Алиә Рәҡаева - Сәлимә исемле ҡыҙҙар, Регина Ғәләүетдинова Артур исемле ул үҫтерә. Ғөмүмән, ошо ун ике йыл эсендә беҙҙең редакцияла байтаҡ балалар тыуҙы, тип ғорурлана алабыҙ. Иҫән булһын балаларыбыҙ, уларҙың ата-әсәләре!**

Гөлфиә ЯНБАЕВА.

...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

# ТУҒАН ТЕЛДӘР ДАНЛАНДЫ

**ЮНЕСКО-ның БР буйынса комитеты БР Мәғариф министрлығы менән берлектә Өфө ҡалаһының 39-сы гимназияһында Жәлил Кейекбаев исемендәге IV Республика туған телдәр фестивале үткәрҙе.**

- Туған телдәр фестиваленең төп бурысы - бөтә милләт балаларын берләштерәү, һәр телгә ҡарата ихтирам тәрбиәләү, - тип һөйләне ЮНЕСКО проекттары буйынса координатор Асия Әхмәтова. - Сара был гимназияла дүртенсе тапҡыр үткәрелә. Йылдан-йыл унда ҡатнашыусылар һаны арта барыуы ҡыуандыра. Беренсе йылда бары 18 генә сығыш яһаусы булһа, быйыл улар 32-гә етте. Тағы ла шуныһы ҡыуанысты: Жәлил Кейекбаев исемендәге туған телдәр фестивале киң билдәлелек яулай. Өфө мәктәптәре генә түгел, Башҡортостандың башҡа район, ҡалаларынан, хатта Ҡырғыҙстандың Нарым ҡалаһынан да ҡатнашырға теләк белдереүселәр бар...

Был юлы сарала ҡатнашыусылар алдына ШОС һәм БРИКС илдәре вәкилдәре менән таныштырыу ҙа шарт итеп ҡуйылғайны. Уҡыусылар Рәсәй Федерацияһы, Ҡытай Халыҡ Республикаһы, Һиндостан, Ҡырғыҙстан, Төркмәнстан, Үзбәкстан, Монголия, Бразилия һәм Көньяҡ Африка Республикаһы илдәренең билдәле шәхестәрен барланы, теле, мәҙәниәте, тарихы менән яҡындан таныштырҙы.

Фестивалдең жюри ағзаһы, "Төньяҡ амурҙары" хәрби-тарихи клубы етәксеһе Илдар Шәйәхмәтовтың сара тураһындағы фекере шулай булды:

- Был бик ҙур мәғәнәгә эйә булған фәнни-ғәмәли, мәҙәни сара. Тик шуныһы: Ж. Кейекбаев исемендәге Республика туған телдәр фестивалено йыл һайын бөтә Рәсәй төбәктәренән балалар бик теләп үҙ эштәрен ебәрә, үҙ милләтенең шәхестәре, мәҙәни мирасы менән таныштыра, ә бына үҙебеҙҙең республиканың ҡайһы бер райондары унда бөтөнләй ҡатнашмай. Арҙаҡлы ғалимдың тыуған төйәге Ғафури районы мәктәптәре лә һаман ситтә ҡалып килә, улар ошондай матур конференция тураһында белмәйме икән әллә, тип хафаланып та ҡуям. Өфөлә Кейекбаев исеме онотолмай, бөтөн донъя телдәре араһында башҡорт теленә лә тейешле иғтибар бүленә. Ошо фестивалдә лә башҡортса сығыш яһаусылар һәр кемдә оло ҡыҙыҡһыныу уята. Өфө ҡалаһының 39-сы гиманазияһында үткәрелгән был фестиваль - ул ҙур бер эштең башланғысы ғына, уны артабан киңерәк масштабтарҙа ойоштороу өсөн хөкүмәт тарафынан тағы ла ҙурыраҡ ярҙам күрһәтелһә, бик мәслихәт булыр ине...

Камила ҒӘЛИЕВА.

# ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

### Алоэ

❖ Өс-биш йыллыҡ алоэ гөлөнөң япрағын ҡырҡып алырға (уға тиклем 5 көн гөлгә һыу һипмәскә). 50 мл алоэ һутына 200-әр грамм ҡаҙ майы, тоҙланмаған аҡ май, бал һәм какао порошогы өҫтәп, болғатырға. Көнөнә 1-2 тапҡыр 1 стакан ҡайнар һөткә 1 ҡалаҡ ошо ҡатнашманы һалып, туберкулез мәлендә эсергә.

❖ Көнөнә 2 тапҡыр ашарҙан 30 минут алда 1-әр балғалаҡ алоэ һутын эсеп, түбән әселекле гастриттан, ас эсәктең лайлалы тиресәһе шешеүҙән, һимереүҙән, эс ҡатыуҙан, бауыр һәм үт ҡыуығы ауырыуҙарынан дауаланырға була. Һалҡын тейгәндә танауға 1-2 тамсы алоэ һуты тамыҙығыҙ.

### Һырҙарҙан сара

❖ Күҙ тирәһендә барлыҡҡа килгән һырҙарҙы шымартыу өсөн үҫемлек майын бер аҙ йылытып, үҙ булмаған етен туҡманы шуға манып, күҙҙәргә һалырға. 15 минут ятып тороғоҙ. Компресты алғандан һуң, күҙ тирәһендәге тирене боҙ менән ышҡығыҙ, туҡландырыусы крем һөртөгөҙ.

❖ Ҙур булмаған һауыттың яртыһынан үҫемлек майы ҡойоғоҙ ҙа, ул тулғансы көнбағыш сәскәләре таждарын һалығыҙ. Сәскәнең киптерелгәне лә ярай. Бер аҙна төнәтергә. Һуңынан таждарҙы күҙ ҡабаҡтарына һалып, компресс эшләргә.

❖ Күҙ ҡабаҡтары шешеүен, һырҙарҙы ҡырғыстан үткәрелгән сей картуф яҡшы бөтөрә. Ошо уҡ маҡсатта сәй, петрушка, йүкә сәскәһе, күк сәскә, аҡ сәскә төнәтмәһен ҡулланырға була. Бының өсөн ярты балғалаҡ үләнде ярты стакан ҡайнар һыуҙа 20 минут төнәтергә, һөҙөргә, ике өлөшкә бүлергә. Бер өлөш төнәтмәне һыуытырға. Мамыҡты бер - һалҡын, бер йылы төнәтмәгә манып, күҙҙәргә һалырға. Иң аҙаҡтан һалҡын компресс менән тамамларға.

### Аҡ шыршы майы

❖ Көслө йүткергәндә пипетка менән телдең төбөнә 3-5 тамсы май тамыҙырға. Дауаланыу курсы 7 көнгә тиклем.

Айбикә ЯҠУПОВА.

## ЙОЛАЛАРЫБЫҘ



# ТӘКӘ МӨГӨҘӨ...
## һаҡлаусы биҙәк

**Халыҡ араһында "тәкә мөгөҙө/ҡусҡар мөгөҙө" тип йөтөрөлгән ҡуш мөгөҙҙө хәтерләткән биҙәк тә һаҡлаусы бурысын үтәй, ахыры. Ул башлыса ҡатын-ҡыҙ кейемен биҙәү өсөн ҡулланыла. Бындай биҙәктәр башҡа халыҡтарҙа ла киң ҡулланыла, шулай уҡ һарыҡтың башы һәм мөгөҙҙәре формаһында яһалған төрлө предметтар, биҙәнеү әйберҙәре Көнсығыш Европа, Көньяҡ Урал, Урта, Үҙәк Азияла борондан осрай.**

Башҡорт халыҡ ижадында юл башлаусы һарыҡ тураһында ла телгә алына. Төньяҡ-көнсығыш башҡорттары легендаларында Урта Азиялағы "Башҡорт тауҙары"нан юғалған һарыҡ көтөүен эҙләп, Уралға килеп сыҡҡан көтөүсе аҙаҡтан бында үҙенең халҡын да алып килә. Р. Кузеев билдәләүенсә, был легендаларҙа бүре тураһындағы боронғо тотемик мифтың сағылышы күҙәтелә. Әммә төрки телле халыҡтарҙа юл күрһәтеүсе йәнлек сүрәтендә болан да, һыйыр ҙа, ат та осрай. Австралия аборигендары мифтарында иртә осорҙа тотем-тәүбабаларҙың сәйәхәте хаҡында яҙыла, юл башлаусы һарыҡ тураһындағы риүәйәттәр ҙә ошоға ышанған башҡорттар төркөмөнөкө булыуы ихтимал.

Шуның өсөн дә эпик әҫәрҙәрҙә, йолаларҙа һарыҡ - яҡлаусы, һаҡлаусы, хатта киләсәкте юрай белеүсе итеп һүрәтләнә. Ҡуҙыйкүрпәс Маянһылыуҙы эҙләп, уның атаһының биләмәһенә килеп еткәс, көтөүҙәге бер ҡуй айырыла ла, ҡыҙға килеп, һөйөнсө ала. Әммә Маянһылыу һөйөнсөгә бүләк биреү урынына, ярама тоҙ һибәһең, тип, уға бысаҡ менән ташлана. Ошо мәлдән алып, ҡуй һарыҡтарының ҡойроҡ майы икегә ярылған, тиҙәр. Изге хайуанға зыян килтереү яҡшы тамамланмай - эпостың аҙағында Ҡуҙыйкүрпәс тә, Маянһылыу ҙа һәләк була (Ғ. Сәләм версияһы). "Билансы Мәргән" әкиәтендә лә һарыҡ ауыр саҡтарҙа геройға ярҙамға ташлана.

Был мотивтар ҡыҙҙарҙың киләсәген юрап башҡарған йолаларында ла сағыла. Һарыҡ ашығын (сөкәлсәй) яҡшылап кимергәндән һуң, уларҙың һәр береһенә үҙҙәренең исемен ҡушып, эттең алдына һалғандар. Эт ҡайһы һөйәкте алдан эләктерә, шул ҡыҙ иң алдан кейәүгә сыға, тип юрағандар. Ғәйнә башҡорттарында ла ҡыҙыҡлы бер йола бар. Апрель башында ҡыҙҙар төнөн, һарыҡтар торған һарайға инеп, һарыҡ тотҡан. Әгәр ҙә ҡыҙ оло һарыҡты тотһа - ҡарт кешегә, ә йәшен тотһа - йәш кешегә, ҡара йөнлө булһа - ҡарағусҡыл йөҙлөгә, аҡ йөнлө булһа - аҡ йөҙлөгә кейәүгә сыға, тип юрала. Әгәр ҙә ҡыҙ инә һарыҡты тотһа, кейәүгә сыҡмай, шуға ла улар тәкәләрҙе тоторға тырышҡан.

XIX быуаттың 20-се йылдарында башҡорттар араһында яурынсы тип йөрөтөлгән юраусылар күп булған. М. Кудряшев яҙыуынса, "кем үҙенең киләсәген белгеһе килә, ул һимеҙ һарыҡ алып килә, уны яурынсы шунда уҡ һуйып, күмәкләп ашайҙар. Һуңынан ул һарыҡтың ҡалаҡ һөйәген ала, теш менән теймәйенсә, уны бысаҡ менән таҙарта һәм ҡыҙыу күмергә һала. Һөйәк ярылғансы күмерҙә ята, аҙаҡтан яурынсы уны яҡшылап ҡарай һәм киләсәкте юрай башлай. Ул ышанысты тауыш менән яҙмышын юратыусыға бәхетле көндәр вәғәҙәләй, бөтөн башланғыстарының яҡшы тамамланасағы тураһында бәйән итә. Ныҡ ҡыуанған башҡорт уға өҫтәп аҡса түләй йәки берәй әйберен ҡалдыра".

**Ф. Илембәтов, А. Илембәтова.**
**"Башҡорт мифтары һәм йолаларында хайуандар культы" китабынан.**
**(Дауамы бар).**

## УЙҘАРЫМДАН УЙЫЛАМ...

# ҠАТЫН КЕШЕ ҠАМЫР МЕНӘН ҠАРТАЯ...



## бала менән һарғая

**Беҙ бала саҡта ҡулдан икмәк төшмәҫ ине: уйнаһаҡ та, мәктәпкә барһаҡ та, дәрестән ҡайтһаҡ та...Уҡыуҙан ҡайтып, атай-әсәйгә йорт-хужалыҡ эштәрендә булышып ингәс, бигерәк тәмле була ине ул.**

Ә хәҙерге балалар ҡулында икмәк һирәк күренеш. Собханалла: магазин кәштәләре тулып ята: ағы-ҡараһы, буханкаһы-ҡаласы... Әсәйем әйтмешләй, икмәктән айырмаһын Хоҙай! Замана балалары ҡулында - йә чипсы, йә "Сникерс". Шөкөр, ҡайыра тешләп, атай, әсәй икмәге ашап үҫкән быуын беҙ - ҡыуанып, ғорурланып ҡуям. Шуға ла һауһаҡ, эшсән, маҡсатлы булып үҫкәнбеҙҙер, тием. Үҙегеҙгә мәғлүм, уҡыусым, элгәре йорт һайын бер-ике бала ғына булманы. Ауыл магазиндарында икмәк тә тулып ятманы - дөрөҫөрәге, бөтөнләй булманы ул кибеттә. Әсәйҙәр бешерә ине икмәкте: ҡомалаҡтан сүпрә ҡайнатып, ҡабартып, хуш еҫле итеп. Был мәшәҡәтле эштең асылын хәҙерге ҡатын-ҡыҙҙарҙың ҡайһылары белеп тә бөтөрмәйҙер әле: "магазиндыҡын" ашап өйрәндек бит. Бәләкәйҙән беҙҙе, өс ҡыҙын да, кешелектең үҙе кеүек боронғо һәм дә изге ошо һөнәр серҙәренә бағышлап, уның бөтөн нескәлектәренә йәләп итеп, бәләкәйҙән өйрәтеп үҫтергәне өсөн рәхмәтлемен әсәйемә. Өлкәндәр бесәнгә китһә, бәләкәйҙәр өй көтөп ҡала: йорт эштәре лә етерлек. Ә иң яуаплы бурыс - икмәк һалыу өсөн "баш бешереү" һәм кискәрәк, эштәгеләр ҡайтыр алдынан уны болғатып ҡуйыу. "Башыңа яулыҡ ябынып, ҡулыңды йыуып, бисмилланды әйтеп тотон, балам", тип өйрәтер ине әсәйем. 5-6 ҡалаҡ ондо төшкө самауырҙың ҡайнар һыуына бутҡа ҡуйылығында бутап, бер аҙ һыуынғас, бер сынаяҡ әҙер сүпрәне (уны әсәйем һис йыбанмай, йыш-йыш яңыртып ҡайнатып тора һәм әсетке һорап килгән кешене буш сығармай ине) һалып болғатаһың да таҫтамалға төрөп, йылы урынға ултыртаһың. 4-5 сәғәттән һуң ҡабарып сыҡҡан "баш"ты, 2-3 туҫтаҡ он, самалап йылы һыу өҫтәп, болғатҡас, тағы йылы итеп төрөп, әсетергә ҡуяһың. Бәләкәй саҡта әсәй был эштең һуңғы этабына беҙҙе ҡушмай, үҙе ҡайтҡас, тансҡап, ҡабартып алыр ине. Бер нисә ҡайта баҫҡылап, йылы итеп төрөп, ҡабарта - шулай иткәндә генә икмәк йомшаҡ булып, ҡабарып бешә. "Ҡамыр - йәш бала шикелле ул, йылыны ярата", тип ҡабатлар ине гел. Әсәйемдең икмәк бешереүгә мейес ҡыҙыуы ғына түгел, күңел йылыһы ла кәрәклекте аңғартыуын үҫкәс кенә төшөндөм. Ут яғып, һыйыр һауып, ашарға бешереп алған арала ҡуҙы һүрелә төшкәс кенә мейескә тыға икмәкле табаларҙы әсәй. Ҡыҙыу ҙа, һүрелке лә булмаһын. Ул самаһын белеп бөткән инде - беҙҙе өйрәтә. Йәйге эш осоронда ана шулай итеп икмәк бешереп алғансы, сәғәт төнгө ун ике лә булып китә ине. Уның ҡарауы, ҡояш кеүек ҡайнар, йөҙө килеп, алһыуланып бешкән түп-түңәрәк икмәктәрҙе ике ҡулында алмашлап һөйә-һикертә таҙа ашъяулыҡҡа теҙеп һалғанда, әсәкәйемдең дә йөҙө ҡояштай балҡыр ине: "Аллаға шөкөр, күптең ризығы ла күп, алай ҙа ғына унды", тип ҡыуана ине. Унғандың ғына икмәге уңып бешеүен мин инде аңлай инем. Күп балалы, айырыуса ете малай үҫкән ғаилә өсөн 3-4 икмәк ике көнгә лә етмәй ҡала - иртәгәһенә тағы ла ҡамырға тотонорға, өйрәнелгән, ятлап алынған шул уҡ хәрәкәттәргә, шул уҡ эшкә "бисмилла"һын онотмай, көн артынан - көн, йыл артынан йыл буйына ҡабат-ҡабат тотондо әсәйем, тик ни тиклем генә хәсрәтле йә арыған мәле булмаһын, икмәк бешергәндә ҡараңғы сырайын күрмәнем... Беләктәрен төрөп, көн дә ҡамыр баҫып, мейес-мейес икмәк һалып, ана шулай ғүмере үтте әсәйемдең. Олоғайған көнөндә ике ҡул суғы менән яурынбаштары һыҙлауының да сәбәбен унан күрмәҫкә тырышты: "Ҡартлыҡ касафаты" тип кенә ҡуйыр ине. Хәйер, ҡамырҙан башҡа ла бөтмәҫ-күренмәҫ йорт-хужалыҡ мәшәҡәттәре аҙмы ни ҡатын-ҡыҙҙың? Аш-һыу яраштырыу эше тулыһынса улар иңендә: йорт хужабикәһенә ял да, отпуск та, "больничный" ҙа, пенсияға сығыу ҙа юҡ... Әлеге мәҡәл тап бына шуға ишара ла инде, күрәһең.

Ҡамыр бер ҡартайтһа, бала хәсрәттәре тамам һарғайта икән шул әсәйҙәрҙе. Ярай ҙа үҙҙәренең йәшлеген, көсөн, һаулығын балалары хаҡына ҡорбан итеп тә, исмаһам, олоғайған көндәрендә ғәзиздәренең түрендә генә ултырыр ҡәҙерҙәре булһа... Армия сафына оҙатҡан улдарын көтөп, төн йоҡламай Илаһына һығынып, уларҙы тыны менән һурып алғанса, нисә үлеп терелде икән әсәм? Кинәндерҙеме һуң әҙерҙе ашап, буй еткергән улыҡайҙары уны? Ошо һорауға яуап эҙләп, аҙашты күңел, юҡ тәкәт. Әсә һөтөн, икмәк ғәмен еңә алырҙай, доғаларҙы ашатлатырҙай ыуға бирешмәһендәр өсөн, улдарҙың да ҡулдарын ҡамырға тығып алыу кәрәк булдымы икән әллә?.. Бынеһы инде аптырағандан тыуған бер йән әрнеүе генә...

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

## ҒАИЛӘ ҺАБАҠТАРЫ

# ОЖМАХ...
## әсәләрҙең аяҡ аҫтында



**Донъяла ғаилә ҡорғандан һуң күп тә үтмәй айырылышҡандар ҙа, бер-береһенә терәк һәм кәрәк булып, оҙон-оҙаҡ бәхетле, мөхәббәтле ғүмер итеүсе парҙар ҙа күп. Өйҙәге бәхет тулылығы, икенсе яртыңдың һанлауы, аңлауы һәм яратыуы нимәгә бәйләнгән? Тәмле-татлы аш-һыу оҫталығынамы? Әллә төҫ-баш сибәрлегенә һәм күңел матурлығынамы? Бәлки, ғаилә именлеген өй тултырып уйнап йөрөгән балалар булдыралыр? Һөйөү хистәрен ғүмерлеккә һаҡлап ҡалыу сере нимәлә? Бөгөнгө ҡунағыбыҙ, ошо көндәрҙә тормош иптәше менән законлы никахтарының 50 йыллыҡ байрамын билдәләүсе Зиләрә ӘМИНЕВА ғаилә ныҡлығын тәьмин итеүсе серҙәре менән бүлешә.**

- Аллаға шөкөр, һәр көнөм бәхеттә, тыныслыҡта һәм һөйөүҙә үтте. Бының шулай булыуы Аллаһы Тәғәлә ярҙамында һәм ҡатын-ҡыҙ ҡулында. Нәҡ беҙ, гүзәл заттар, йорттағы тормошто ожмахҡа, йәки, киреһенсә, тамуҡҡа әйләндерә алабыҙ, иребеҙҙең күңелен мәңгелеккә үҙебеҙҙеке итәбеҙ йәки уның ҡасыуына сәбәпсе булабыҙ. Бәхет байлыҡта, тиеүселәр менән бер нисек тә килешмәйем. Байлыҡҡа күмелеп тә бәхетһеҙ булған ҡатын-ҡыҙ әҙме ни? Уларҙан да, бер ниндәй байлыҡтарына ҡарамай, ирҙәре арттарына ла ҡарамай ҡасырға мөмкин. Бала менән генә лә тормош иптәшен янда тотоп булмай. 10 малай табып та, ирҙәренән һөйөү күрмәгән йәки ирһеҙ тороп ҡалған ҡатын-ҡыҙҙарыбыҙ күп. Шулай уҡ аш бүлмәһенән сыҡмай, иренең алдынан тәмле-татлы ризыҡ өҙмәгән, төрләндереп аш-һыуын бешергән ҡатындарҙың да ирҙәренең насар мөғәмәләһенә зарланғанын ишеткәнем бар. Әлбиттә, былар ҙа мөһим, тик ғаилә бәхете уларға ғына ҡайтып ҡалмай, ә күпселек осраҡта ҡатын-ҡыҙҙың аҡылына, тотанаҡлығына бәйле.

Мин ирем асыуланған саҡта һүҙ көрәштермәйем, күберәген шымып ҡына торам. Ләкин бындай тынлыҡты мыҫҡыллы, нәфрәтле йәки кәмһетеүле ҡараш менән оҙатыуҙан һаҡланам, сөнки ул ауыҙына һыу уртлағандай торһаң да, күҙ ҡарашынан барыһын да аңлаясаҡ. Әлбиттә, бындай саҡтарҙа уның янында тормаҫҡа, ә икенсе бүлмәгә сығырға ла мөмкин булыр ине. Тик был аҙымды ирем мин уны тыңларға теләмәйем тип ҡабул итәсәк һәм хәл тағы ла ҡатмарлашасаҡ, шуға күрә, ҡайҙалыр сығып китеү хаҡында уйламайым да. Ә әйтерен әйтеп бөткәс, киреһенсә, уның яңғыҙын ҡалдырам. Асыуҙан, ярһыуҙан ял итеп алғансы, өй эштәре менән булышам һәм ошо рәүешле үҙем дә тынысланам.

Ҡайһы берәүҙәр ире менән һүҙгә килешкәндән һуң көндәр, аҙналар, хатта айҙар буйы һөйләшмәй йөрөй. Мин был ысул яҡлы түгел, сөнки, беренсенән, ул быға өйрәнеп китергә мөмкин, икенсенән, артабан уның талаптары артып китеүе лә бар, ә быға юл ҡуйырға ярамай. Шуға күрә, бер-ике сәғәт үткәс, уның алдына сәй йәки һут ҡуям да, бер ни булмағандай һөйләшә башлайым. Минең тыныслығым уға ла тәьҫир итә, үҙенең һүҙҙәре өсөн оялып, минән ғәфү үтенә. Ошо урында күптәр ғорурлыҡ тураһында иҫкә төшөрөр. Минеңсә, ир менән ҡатын араһында бындай ғорурлыҡҡа урын юҡ. Минең өсөн ғорурлыҡ - ул иремдең ҡәнәғәт булыуы һәм беҙҙең мөнәсәбәттәрҙең тыныслығы. Ошоно барыһы ла, күптән бергә йәшәгән парҙар ҙа, өйләнешергә генә йөрөгән йәштәр ҙә ни тиклем иртәрәк аңлай - шул тиклем тормоштары күркәмерәк, бәхеттәре түңәрәгерәк буласаҡ.

Хоҙай беҙҙе Кеше итеп яралтҡан һәм ир-ат өсөн гүзәл зат Ерҙә иң шәфҡәтле һәм мәрхәмәтле йән. Беҙ уларға һөйгән йәр ҙә, ҡатын да, әсә лә. Бала саҡта беҙ атайҙарға ожмахҡа ишек асабыҙ, йәшлегебеҙҙә иребеҙҙең иманын тулыландырабыҙ, ә әсәлектә ожмахты аяғыбыҙ аҫтына һалабыҙ. Быны барыһы ла аңларға тейеш.

*✓ "Беҙҙе бит ололар бәләкәй саҡта арҡанан ҡағып, "Әй, арий балалары", тип ярата торғайны. Бер-бер артлы өс тапҡыр "Арий ҡәүеме" тип әйтһәң, "Арҡайым" килә лә сыға. Шул арийҙар беҙ булабыҙ инде ул..."*



*ТАРИХ ЯРСЫҠТАРЫ*

**ХХ быуат башы Рәсәй яҙмышында ҡырҡа боролош яһаған тарихи ваҡиғаларға - революцияларға, һуғыштарға бай булған ҡатмарлы осор була. Илде ялмап алған тетрәнеүҙәр, бер яҡтан, һанһыҙ кеше ҡорбандарына, илдең иҡтисадына ҙур матди зыян килтерһә, икенсе яҡтан, халыҡтың социаль әүҙемлеген арттырыуға, төрлө ойошмаларҙың, милли хәрәкәттәрҙең барлыҡҡа килеүенә булышлыҡ итә.**

# ХХ БЫУАТ БАШЫНДА...

## мосолман ҡатын-ҡыҙҙары ойошмалары



Ҡатын-ҡыҙ ойошмаларының артыуы ла ошо шарттарҙа бара. Демократик реформалар "көсһөҙ" заттарҙы ла йәмәғәт эштәрендә әүҙемләшергә этәрә. 1905-1907 йылдарҙағы революция йоғонтоһонда хөкүмәт граждандарға төрлө йәмәғәт ойошмалары төҙөүгә рөхсәт бирә. ХХ быуаттың башында Башҡортостан тарихында тәүге ҡатын-ҡыҙ ойошмалары барлыҡҡа килә. Улар араһында мосолман берләшмәләре айырым урын алып тора. Тикшеренеүселәр мәғлүмәттәре буйынса, үткән быуаттың башынан 1917 йылға тиклем асылған ошондай ойошмаларҙың һаны 70-кә етә. 1907 йылдан Өфөлә эшләй башлаған "Мосолман ҡатын-ҡыҙ ойошмаһы" ("Мусульманское дамское общество") шуларҙың тәүгеһе була.

"Мосолман ҡатын-ҡыҙ ойошмаһы" 1907 йылдың 12 декабрендә Өфө ҡалаһында барлыҡҡа килә. Уставта ойошманың маҡсаты мәҙәни-ағартыу, әхлаҡи-тәрбиә эше, тип күрһәтелә. Быны тормошҡа ашырыу өсөн улар төрлө типтағы ҡыҙҙар мәктәптәре ойоштторорға, уҡыу һәм тәрбиә эшен яҡшыртыу өҫтөндә эшләргә, уҡыусыларға һәм уҡытыусыларға матди ярҙам күрһәтергә, мосолман ҡатын-ҡыҙҙарына мәктәптән тыш ғилми, профессиональ белем биреүҙе хәстәрләргә, китапханалар, уҡыу залдарын төрлө шөғөлдәргә өйрәткән оҫтаханалар асырға, халыҡ алдында лекциялар үткәрергә планлаштыралар. Шулай уҡ дауаханалар, амбулаториялар, ҡыҙҙар өсөн приюттар асыу ҙа маҡсат итеп ҡуйыла. Өфөнөң абруйлы һәм бай ҡатын-ҡыҙҙары С. М. Солтанова, Ф. М. Басимова, М. Т. Солтанова, С. С. Йәнтүрина, З. М. Солтанова, Г. С.-А. Камалетдинова һәм башҡалар йәмғиәттең ойоштороусылары булып сығыш яһай. Йәмғиәт ойоштороло менән әүҙем рәүештә эшкә тотона. 1908 йылда атай-әсәйһеҙ ҡалған 25 башҡорт һәм татар ҡыҙҙарына тәғәйенләнгән приют, ҡатын-ҡыҙҙар өсөн китапхана асыла. 1913 йылда уларҙың 7 уҡыу йорто була.

Башҡортостан территорияһында телгә алынған осорҙа унлаған ошондай ойошма эш алып бара. Был ойошмаларҙың төп йүнәлеше хәйриә эше була. "Бәләкәй эштәрҙе" хәл итеү менән генә сикләнеп, улар сәйәсәткә ҡыҫылмайынса, власть структуралары менән араларҙы боҙмаҫҡа тырыша.

ХХ быуат башында барлыҡҡа килгән йәмәғәт ойошмалары араһында "Ырымбур мосолман ҡатын-ҡыҙҙар йәмғиәте" (Оренбургское мусульманское женское общество) айырым урынды алып тора. Уны ойоштороусылар булып ҡаланың һәм губернаның бай ҡатын-ҡыҙҙары Ф. М. Әҙәмовалар, Х. М. Ҡотлобулатова, З. М. Рәмиева, Ф. М. Ураева, Ф. М. Тенишева, Р. Т. Сөләймәнова, Р. Б. Мөхәмәтйәровалар сығыш яһай. Йәмғиәт шулай уҡ мосолман ҡатын-ҡыҙҙарына белем биреүҙе һәм мохтажлыҡ кисереүсе көсһөҙ заттарға һәм балаларға ярҙам күрһәтеүҙе маҡсат итеп ҡуя. Үрҙә ҡуйылған маҡсаттарҙы тормошҡа ашырыу өсөн ойошма китаптар сығара, уҡыу өсөн кабинеттар, китапханалар, ҡыҙҙар өсөн мәктәптәр булдыра, халыҡҡа лекциялар, әҙәби кисәләр, төрлө курстар, йыйылыштар, әңгәмәләр үткәрә. Йәмғиәттең эшмәкәрлеге бары хәйриә эше менән генә сикләнеп ҡалыуына һәм уның эше оҙаҡҡа һуҙылмауға ҡарамаҫтан, ойошма губернаның ҡатын-ҡыҙҙарын берләштереү йәһәтенән ҙур эш эшләй.

Ҡатын-ҡыҙҙарҙың йәмәғәт ойошмаларының эшмәкәрлегенә Балҡан һәм Беренсе Бөтә донъя һуғышы ҙур үҙгәрештәр индерә. Был ваҡытта дәүләттең бар тармаҡтары хәрби ихтыяжды ҡәнәғәтләндереүгә йүнәлтелә. Ошо сәбәпле ҡатын-ҡыҙ ойошмаларының күптәре матди ярҙам алыу сығанаҡтарын юғалта. Шуға күрә элек ҡуйған маҡсаттарҙы үтәй алмай башлайҙар. Эшмәкәрлек йүнәлеше лә үҙгәрештәр кисерә. Балҡан һуғышы ваҡытында Башҡортостандың күп кенә мосолман ҡатын-ҡыҙҙары госпиталдәрҙә яралыларға медицина ярҙамы күрһәтеү буйынса ирекле миссияларҙа ҡатнаша. Беренсе донъя һуғышы башланып китеү менән фронтҡа саҡырылған яугирҙарға, уларҙың ғаиләләренә ярҙам итеү буйынса ойошмалар барлыҡҡа килә.

1914 йылдың июлендә Мәләүез ауылында түбән чиндарҙы белгән һәм ополчениела һуғышҡан яугирҙарҙың ғаиләләренә ярҙам күрһәтеү өсөн төҙөлгән йәмғиәт барлыҡҡа килә. Йәмғиәт 152 мохтаж кешегә ярҙам күрһәтә. Шул уҡ йылдың сентябрендә Ергән ауылында ла шундай уҡ йәмғиәт барлыҡҡа килә.

Һуғыш ваҡытында хәрби әсирҙәргә ярҙам итеү буйынса ҡатын-ҡыҙ йәмғиәттәре барлыҡҡа килә. Билдәле меценат Маһипәрүәз Шәйхғәлиева, үҙенең ире, Рәсәй армияһы генералы Шәйхғәлиевтың абруйын ҡулланып, Өфөлә әсирлектә булған төрөк һалдаттары һәм офицерҙарына ярҙам итеүгә рөхсәт ала. Ошо маҡсатта ул Өфөнөң ҡатын-ҡыҙҙары менән берлектә ярҙам фондына 356 һум аҡса йыя.

Рәсәйҙә эшләп килгән тиҫтәләгән мосолман йәмәғәт ойошмаларының көстәрен берләштереү маҡсатында, 1914 йылдың декабрендә, мосолмандар Бөтә Рәсәй съезы үткәрә. Унда яугирҙарға һәм уларҙың ғаиләләренә ярҙам итеү буйынса үҙәкләштерелгән мосолман комитетын төҙөү ҡарала. Комитет яралылар өсөн лазареттар асыу, санитар отрядтары төҙөү һәм уларҙы фронтҡа ебәреүҙе маҡсат итеп ала. 1916 йылдың йәйендә комитет ярҙамы менән мосолмандарҙан торған санитар отряд төҙөлөп, фронтҡа ебәрелә. Отрядты билдәле юрист, адвокат, II Дума депутаты Ғәлиәскәр Сыртлановтың тол ҡатыны Әминә Шәйхғәлиева-Сыртланова етәкләй.

**Шулай итеп, ҡатын-ҡыҙҙар ойошмалары XIX-XX быуат сигендәге ваҡиғалар сылбырында әүҙем ҡатнаша. Улар ҡатын-ҡыҙҙарҙың хоҡуҡтарын яҡлау менән бергә, тыныс ваҡытта ла, һуғыш осоронда ла дәүләт, халыҡ өсөн күп файҙалы эш башҡаралар.**

**Римма СӨЛӘЙМӘНОВА,**
**тарих фәндәре кандидаты.**

*ҺҮҘ АРАҺЫНДА...*

# АНЫҠЛАП ҠУЯҺЫ ИНЕ УЛ...

**Әхмәтзәки Вәлиди Туғандың "Башҡорт тарихы" китабын (Өфө, 2010. 232 б.) уҡып ултырғанда Башҡорт ғәскәрҙәрендә 1918-1919 йй хеҙмәт иткән татар офицеры Исмәғил Шәриповтың хәтирәләренә юлыҡтым.**

"...Ниндәй генә башҡорт ауылына барып инһәң дә, халыҡтың милли рухы ташҡынын күҙәтергә була ине. Улар халыҡтың киләсәге, үҙаллылығы өсөн йәнен-тәнен аямаған, изге эш өсөн үҙ башын һалырға әҙер булған кешеләр ине. Башҡорттарҙағы бындай рухты немецтарҙа ла, рустарҙа ла, башҡаларҙа ла күҙәткәнем булманы. Бындай халыҡтың милли хәрәкәте һәм рухы үҙ тарихында ғына түгел, хатта бүтән халыҡтарҙың тарихында ла яҙылырға һәм һәр кешенең һоҡланыуына хаҡлы", - ти Исмәғил Шәрипов. Ошо юлдарҙы уҡығас, бик күп башҡорт йырҙары, эпостары, ҡобайырҙары иҫкә килеп төштө, айырыуса башҡорт халҡының рәсми булмаған гимны "Уралым" халыҡ йырының ошо һүҙҙәре телдә уралды:

*Аямаған йәнен, түккән ҡанын -*
*Һис бирмәгән башҡорт Уралын!*

Эйе, ата-бабаларыбыҙҙың шундай көслө рухы тыуҙырған да инде ошондай мәҙәниәтте, ошондай данлы тарихты. Ә беҙ ул рухты һүрелтмәҫкә, тарихыбыҙҙы йөрәгебеҙҙә һаҡларға бурыслы. Әммә, ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, һәр милләттәш тоймай шул әле иңендә был бурысты...

Тағы бер хәл тураһында һөйләп киткем килә. Ошо көндәрҙә Илдар тигән ағайҙы осраттым. Ул минән: "Арҡайым һүҙе нимә аңлата?"- тип һораны. Әлбиттә, варианттарҙы һанап киттем. Ун мине өндәшмәй генә тыңланы ла, үҙенең дәлилдәре менән мин һынағандарҙың барыһын да юҡҡа сығарҙы:"Нишләп, ҡустым, беҙҙең ғалимдар башҡорт исеменең аңлатмаһын сит телдәрҙән эҙләй икән ул? Беҙҙе бит ололар бәләкәй саҡта арҡанан ҡағып, "Әй, арий балалары", тип ярата торғайны. Бер-бер артлы өс тапҡыр "Арий ҡәүеме" тип әйтһәң, "Арҡайым" килә лә сыға. Шул арийҙар беҙ булабыҙ инде ул..." Был хаҡта элек тә ишеткән, уҡыған булды. Тик, ниңәлер, ғалимдарыбыҙ был хәҡиҡәтте өҙөп кенә, аныҡ ҡына итеп раҫлап, нығытып ҡуймай һаман...

**Айнур ИШЕМҒОЛОВ.**

*БАШҠОРТ ҠАМУСЫ*



*Сергей РУДЕНКО*

# БАШҠОРТТАР

## Исламға тиклем булған дини йолаларҙың сағылышы

Башҡорттарҙың күҙаллауы буйынса, ябай йылан йөҙ йәшкәсә йәшәп, аждаһаға әүерелә. Аждаһаның оҙонлоғо бер нисә сажин була, күлдәрҙә, ҡайһы берҙә ҡоҙоҡтарҙа йәшәй. 500 йәки 1000 йыл йәшәп, ул юхаға әйләнә. Юха кеше, хайуан һ.б. булып әүерелергә һәләтле, кешеләрҙе, бигерәк тә ҡыҙҙарҙы ашай. Аллаһ ҡөҙрәте менән, аждаһа юха йәшенә етмәй, сөнки болоттар уны Боҙло океан артында ятҡан һәм һәр төрлө йыландар, аждаһалар менән тулған Ҡаф тау артына алып китә. Аждаһаны нисек болоттар алып киткәнлеге тураһында башҡорттарҙа бик күп хикәйәттәрҙән һәм уны үҙ күҙҙәре менән күргән шаһиттарҙан ишетергә мөмкин. Уларҙың ҡайһылары Юлыевтың мәҡәләләренең береһендә ентекле бәйән ителә. Аяҙ көндә ҡапыл бәләкәй генә болот килеп сыға ла, йәшенле ямғыр күл яғына ыңғайлай. Болоттоң күлгә тейеүе була, күл ярһый, ҡайнай башлай. Унан ҡымыҙ өсөн тәғәйенләнгән ағас туҫтаҡ кеүек аҡайған ҙур күҙле ҡот осҡос ғифриттең башы күренә. Болот уны ҡосағына алып, өҫкә күтәрелә, үҙенең артынан кәүҙәһен дә һөйрәй; ғифриттең тәне ялтыр таплы, ҡойроғо һәнәк кеүек икегә айырылған. Ғифрит һыуҙан бер ни тиклем күтәрелгәс, һуҙыла, борғолана башлай, ҡойроғон ян-яҡҡа бәргеләй һәм уның артынан ерҙә бураҙналар ҡала. Болот алып киткән йән эйәһе уфылдай, һыҙғыра, йә ҡойроғон ҡулса итеп урай, йә үҙен асыулы итеп ҡойроғо менән ҡамсылай башлай һәм тотҡонлоҡтан ҡотолорға теләй; әммә ниндәйҙер көс уның башын ҡыпһыуырҙай ҡыҫып тотоп, уға борғоланырға ла ирек бирмәй. Ҡотола алмағас, ул яйлап болот тарафынан йотола бара, ә уның ҡояш нурҙары аҫтында ҡалған кәүҙәһе сағыу алтын төҫкә мансыла.

Ҡайһы бер хикәйәләүҙәр буйынса, айырым осраҡтарҙа аждаһа кеше ҡиәфәтенә инә. Бер хан күл буйында осраған матур ҡыҙға өйләнә, ул, ахырҙа, аждаһа булып сыға. Ханды һунарҙа ла, барлыҡ эшмәкәрлегендә лә уңышһыҙлыҡ һағалай башлай. Ҡатынын һынап ҡарау өсөн, яҡындарының кәңәше буйынса, ул уға тоҙло ит ашата һәм һыу эсермәй. Төнөн ҡатыны ҡойроғон иренең өҫтөндә ҡалдырып, кәүҙәһе менән йорттан 150 метр алыҫлыҡта булған күлгә һыҙыла һәм шунан һыу эсә. Шулай итеп ҡатынының аждаһа булыуын асыҡлаған хан уны тимер өйҙә яндыра. Шунан башлап көл әле лә күҙ ауырыуҙарын дауалағанда файҙаланыла.

Башҡа хикәйәләүҙәр буйынса, матур ҡыҙға әүерелгән юха ханға кейәүгә сыға һәм хан уның кендеге булмауына иғтибар итеп, яндыра.

Йондоҙҙарҙан һәм тәбиғәт күренештәренән тыш, башҡорттар ерҙәге бөтөн нәмәне лә йәнләндергән. Ибн-Фаҙлан яҙыуынса, һәр нәмәнең эйәһе булған: тау эйәһе, таш ҡыуыш эйәһе, йорт эйәһе һ.б. Ошо эйәләргә инаныу башҡорттарҙы төрлө тауҙарҙы һәм мәмерйәләрҙе ихтирам итергә өйрәткән.

Көньяҡ Уралдың ҡайһы бер тауҙарында, аныҡлап әйткәндә Мәсем тауы башында тау эйәһенә баҡыр аҡса, ҡатын-ҡыҙҙарҙың түшелдеректәренең ҡурғаш йәки көмөш биҙәүестәре, ағас ботаҡтарына йәки таш араһына ҡыҫтырылып нығытылған таяҡтарға бәйләнгән сепрәк киҫәктәрен күрергә тура килде.

***✓ Оҙаҡ йәшәй башлаһа, ир менән ҡатындың тормошо прозаға әйләнә. Ләкин прозаны әҙерәк кенә поэзия менән йәнләндереп ебәреү өсөн бер йылы һүҙ ҙә етә. Әйҙә, бешергән ашын, кейемен, биҙәнеү әйберҙәрен маҡтап ебәр!***



**Оҙайлы һалҡын ҡыштан һуң килгән яҙ миҙгеле юҡҡа ғына ҡатын-ҡыҙҙар байрамы менән башланып китмәй, ахыры. Гүзәл зат яҙ кеүек наҙлы ла, иркә лә, көләс тә булырға тейеш. Ҡатын-ҡыҙҙың матурлығы ниндәй төшөнсәләрҙән хасил була? Ғүмер көҙөнә яҡынлашып килгәндә лә нисек матур булып ҡалырға? Ҡатын-ҡыҙҙар көнө айҡанлы яҙыусы, Салауат Юлаев исемендәге Дәүләт премияһы лауреаты Таңсулпан ҒАРИПОВА, филология фәндәре кандидаты, З. Исмәғилев исемендәге Өфө дәүләт сәнғәт академияһы уҡытыусыһы Гөлсәсәк САЛАМАТОВА, Башҡортостандың халыҡ артисы, М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры артисы Сара БУРАНБАЕВА менән ошо мәңгелек һорауҙарға яуап эҙләп ҡараныҡ.**

**▸ Халыҡ ижады әҫәрҙәрендә лә ҡыҙҙың матурлығын баһалау уның йөҙөнән, тышҡы ҡиәфәтенән башлана. Шулай ҙа, матурлыҡ ниндәй төшөнсәләрҙе үҙенә ала? Йәш саҡта ғына түгел, өлкәнәйгәс тә матур булып ҡалыу ул шулай уҡ һәләтме?**

**С. Буранбаева:** Һәр заманда ла ҡатын-ҡыҙ тышҡы ҡиәфәтенә шул тиклем ҙур әһәмиәт биргән... 

**С. Буранбаева:** Һәр заманда ла ҡатын-ҡыҙ тышҡы ҡиәфәтенә шул тиклем ҙур өҫтөнлөк биргән. Эске матурлыҡ мөһим, тик шулай ҙа кешене барыбер тышҡы ҡиәфәтенә ҡарап ҡаршы алалар. Кеше тышҡы ҡиәфәтенә нык иғтибар иткән осорҙа йәшәйбеҙ, шуға ла ҡатын-ҡыҙҙың үҙ стилен табып, үҙен тәрбиәләп йөрөүенә мин һоҡланам. Ҡатын-ҡыҙ гел матур булырға тейеш. Яңыраҡ телевизорҙа бер тапшырыуға юлыҡтым, унда өлкән генә йәштәге ир уҙаманы үҙенә йәш ҡатын эҙләй. "Ни өсөн йәш ҡатын көҙ еҫен һуларға теләй, тип уйлайһығыҙ әле?" - ти алып барыусы. "Тормошҡа сығып, балалар үҫтерә башлаһа, ҡатындарҙың күптәре үҙен ҡарамай башлай, ә ирәтка ундайҙарҙы яратыуы ауыр", - тип яуап бирҙе ағай. Ысынлап та, күп осраҡта ҡатын-ҡыҙ матур булмауында үҙе ғәйепле. Шуға ла баланы уҡытайым, баланы кейендерәйем, тип, үҙенән аҡсаһын йәлләп ултырыусылар дөрөҫ эшләмәй, тип уйлайым. Ғаилә бюджетын косметик салондарға ла бүлергә, ирендә лә был фекергә өйрәтергә кәрәк. Сөнки тәрбиәле, матур ҡатыны уның да абруйын күтәрә бит.

**Г. Саламатова:** Матур булыу, уны һаҡлау - ул көндәлек хеҙмәт. Ун һигеҙ, егерме йәштә матурлыҡты күрһәтеү өсөн артыҡ нәмә кәрәкмәй, сөнки йәшлек үҙе матурлыҡ, нимә кейһәң дә килешеп бара. Аҙаҡтан шул матурлыҡты һаҡлау өсөн тырышырға кәрәк, ә был шул тиклем ауыр, донъя төрлө шарттарға ҡуя һине, кешенең тән төҙөлөшө лә төрлөсә. Кемгәлер был еңел бирелә, кемгәлер юҡ. Тышҡы матурлыҡта тырышлығың, үҙеңдең үҙеңә ҡарата булған ихтирамың һәм йәшәү рәүеше күренеп тора инде ул.

**Т. Ғарипова:** Ҡатын-ҡыҙ тәбиғәттән бирелгән булмышына ҡарағанда матурыраҡ булып күренергә тырышмаһа, ул ҡатын-ҡыҙ түгел, тигән кемдер. Гүзәл зат гел матур булырға бурыслы. Улым Санкт-Петербургта уҡыған саҡта был ҡалаға бик йыш йөрөнөм. Яҙыусының эше күҙәтеү, ундағы өлкән йәштәге ҡатындарҙың ҡиммәтле булмаһа ла, нәзәкәтле, оҫта итеп кейенеү һәләтенә эйә булыуҙарына аптырағайным. Улар ҡатын-ҡыҙға ҡатын-ҡыҙ рәүеше бирә торған, уны көсәйтә торған элементтар өҫтәп кейенә. Беҙҙең халыҡта, дөйөм алғанда, ундай мәҙәниәт юҡ. Олоғайғас, миңә ярамағанмы, тигән ҡараш йәшәй. Минеңсә, киреһенсә, олоғайғас үҙеңде тағы ла ныҡыраҡ ҡарарға кәрәк. Әҙерәк биҙәнмәйенсә, магазинға ла сыҡмайым. Ҡатын-ҡыҙ асылынан китеп булмай, Хоҙай гүзәл зат итеп яралтҡан икән, һин шул булмышыңа һәр йәштә лә тоғро ҡалырға тейешһең. Беҙ һәр ваҡыт милләттең йөҙөн һаҡлайбыҙ. Әрпешерәк кейенеп йөрөгәндәрен күрһәм, эргә-тирәләге ҡатындарға шулай тип әйтәм: "Ошо кейемең менән һине төрлө милләт кешеләре күрә. Төп халыҡ булараҡ, һинең насар кейенеп йөрөргә хоҡуғың юҡ, сөнки һиңә ҡарап, милләт тураһында фекер йөрөтәләр". Беҙ милләт вәкиле булараҡ сығыш яһайбыҙ, урындағы төп халыҡ үҙен матур тоторға, матур кейенергә тейеш.

**▸ Ҡатын-ҡыҙ иң тәүҙә үҙен яратырға тейеш. Үҙеңде яратырға өйрәнмәйенсә, башҡалар һине ярата алмаясаҡ, тигән кәңәш бирә бөгөн психологтар. Матурлыҡ менән үҙ-үҙеңде ярата белеү араһында ниндәй уртаҡлыҡ бар?**

# БӘҪЛЕ, ҠЫЙБАТЛЫ

## беҙ бит күкрәген саф көмөш,

**Г. Саламатова:** Үкенескә күрә, беҙҙең ҡатын-ҡыҙҙарҙың трагедияһы шунда - ул тәү сиратта үҙен баһалай, тимәк, ярата белмәй. Хатта кейәүгә сыҡҡанда ла, миңә ярай ул, тип ир һайлағандар бар. Ғөмүмән, ғаиләлә ир менән ҡатындың аҡыл кимәле, хыялдары, фекерҙәре уртаҡ булырға тейеш. Студенттарға ла гел әйтәм, талантлы менән талантлы ҡауышырға тейеш, аҡыллы менән аҡыллы. Әгәр ҙә талантлы менән талантһыҙ ҡауышһа, талантлыға - талантһыҙ, аҡыллыға аҡылһыҙ көс буласаҡ һәм талантлы ла, аҡыллы ла үҙен юғалтасаҡ. Үҙеңде ихтирам итергә ғаиләлә өйрәнәһеңдер инде, бала сағы бәхетле үтеүе кеше өсөн шулай уҡ ҙур уңыш. Әммә ғаиләлә быға иғтибар бирмәүҙәре лә бар.

**Т. Ғарипова:** Ололарға ярҙам итеү беҙҙең ауылда иң ҙур мәртәбә, иң ҙур сауап ҡына түгел, маҡтаулы эш һаналды. Ололарға ярҙам итһәң, улар: "Балам, тиңеңә бар", - ти торғайнылар. Хәҙер уйлап ҡараһаң, күп айырылыуҙар тиң булмаған кешеләрҙең ҡауышыуынан килә, баҡтиһәң. Ул һиңә төҫ, аҡыл, интеллект, мәҙәнилеге йәһәтенән дә тиң булырға тейеш. Үҙеңде яратыу тигәндә, матур кейенеү генә уның күрһәткесе була алмай. Матур кейенеүҙә милләтеңдең вәкиле булыуың өсөн яуаплылыҡ ята. Мин фольклор нигеҙендә бер нисә пьеса яҙҙым, уларҙың береһендә лә халҡым ярлы, меҫкен түгел. Әлбиттә, төрлө драматизмдар, трагизмдар бар, әммә меҫкенлек юҡ.

Кеше үҙ-үҙен яратырға, хөрмәт итергә тейеш, тигән төшөнсәләр һуңғы ун йылда беҙгә сит ил әҙәбиәтенән, сит ил йәшәйешенән килеп инде. Уға тиклем үҙ-үҙеңде яратыу эгоизм, хурлыҡ, тип өйрәттеләр беҙҙе. Шуға ла был теманың килеп сығыуы ыңғай күренеш. Ысынлап та, кеше үҙен-үҙе яратмаһа, нисек кейенһә лә, эсеп, йәмғиәттә күренһә лә уға барыбер.

**С. Буранбаева:** Һин үҙеңә ниндәй мөнәсәбәттәһең, башҡалар ҙа һиңә шундай мөнәсәбәттә була. Ғаиләлә ир тарафынан психологик, эмоциональ рәнйетеүгә дусар була икән, бында ҡатын-ҡыҙ үҙе ғәйепле, сөнки ул үҙе быға юл ҡуя. Ҡул күтәреүҙәр тураһында әйтеп тә тормайым, быныһы инде сикте бөтөнләй сығыу була. Үҙен яратмаған, хөрмәт итмәгән ҡатын-ҡыҙ ғына былар ҙы рөхсәт итә. Шунан ул үҙен нисек матур, һөйкөмлө итеп тойһон? Мөмкинлек күп бөгөн, психология буйынса китаптар уҡырға, камиллашырға кәрәк. Тормошта осраған кире күренештәрҙең нигеҙе наҙанлыҡта. Хатта балаң алдында абруйың булһын өсөн дә күп тырышырға, уның менән тиң булыу өсөн заманса техниканы өйрәнергә кәрәк, юғиһә, ул интернеттағы берәй геройҙы үҙенә абруй итеп һайлаясаҡ.

**Г. Саламатова:** Беҙҙә бер-беребеҙгә комплимент әйтешеү юҡ кимәлендә. Туғандары, дуҫтары алдында иремдең мине маҡтай торған холҡо башта миңә лә сит ине. Баштараҡ, мин бит тоҡом дауам итә, малайҙар таба торған кәләш алдым, тиһә, хәҙер, мин ҡатынымды тоҡомдо матурайтыр өсөн алдым, тип тә өҫтәй. Бының менән ул минең күңелемде лә үҫтерә, ышанысымды арттыра. Бына ошоларға ла өйрәнергә кәрәк әле беҙгә.

**Т. Ғарипова:** Оҙаҡ йәшәй башлаһа, ир менән ҡатындың тормошо прозаға әйләнә. Ләкин прозаны әҙерәк кенә поэзия менән йәнләндереп ебәреү өсөн бер йылы һүҙ ҙә етә. Әйҙә, бешергән ашын, кейемен, биҙәнеү әйберҙәрен маҡтап ебәр! Ҡатын-ҡыҙға күп кәрәкмәй ул, шуны аңлаған ирҙәр бәхетле йәшәй, сөнки улар ҡатынының күңелен күреп, үҙҙәренә имен ҡартлыҡ тәьмин итә. Ә кемдәр шуны аңламай, матурлыҡты ситтән эҙләй, улар үҙҙәренә шөҡәтһеҙ, йәмһеҙ ҡартлыҡ әҙерләй. Башҡортта матур бер һүҙ бар, үткәреп ебәрә белергә кәрәк, тиҙәр. Ҡатын-ҡыҙға иһә сарбайланып, һәр нәмәгә оран һалырға ярамай. Үткәреп ебәрә белеү, тигәндә, икенсе яртыңды ғәфү итеү, үҙең дә шул хәлде онотторға тырышыу кәрәклеген дә күҙ уңында тотҡандарҙыр инде. Сөнки үткәреп ебәрә белмәһәң, ғаиләлә йәшәүе ауыр.

**▸ Гүзәл зат, һис шикһеҙ, матур итеп кейенә белергә лә тейеш, тинегеҙ. Кейем-һалымды ниндәй принцип буйынса һайлайһығыҙ? Был йәһәттән тәүге уҡытыусыларығыҙ кем булды?**

**Т. Ғарипова:** Бәләкәй саҡтағы шундай ваҡиға хәтеремә һеңеп ҡалған: байрамдарҙа, ураҙа ғәйеттәрендә ауылдың өлкән инәйҙәре милли кейемдәрен кейеп, ҡунаҡҡа йөрөшә, ә мин уларҙы күҙәтеп торорға ярата инем. Хатта байрамдарҙы ла тап шуның өсөн генә көтөп ала инем. Ул мәлдә әле һәр өйҙә милли кейемдәр, селтәрҙәр булды. Берәй концерт-фәлән ҡуйһаҡ, инәйҙәрҙән, еңгәләрҙән кейемдәрен алып тора инек. Әсәйем - уҡытыусы, ул 1902 йылғы, йәғни революцияға тиклемге тормошто күргән, шул заманда затлы кейемдәр кейеп йәшәп өлгөргән. Һәр иртә торғас та мотлаҡ башҡара торған тәүге эше - сәсен томлап үреү ине. Ул һәр ваҡыт бөхтә, матур кейенергә тырышты. Бына ошо өлгөләрҙе күреп, матур итеп кейенә белеү үҙеңдең генә түгел, ул тирә-йүндәге кешенең дә кәйефен күтәрә торған күренеш икәнен аңланым. Яҙыусы булараҡ, йыш ҡына төрлө сараларҙа, уҡыусылар менән осрашыуҙа, байрамдарҙа ҡатнашырға тура килгәндә махсус тектергән күлдәктәр ҙә кейәм. Күптән түгел Италия ебәгенән затлы күлдәк тектерҙем, итәге боронғоса - әберкәле, еңдәрен камфара иттерҙем. Ҡаракүлдән камзул тектереп, сулпылар яһаттым. Бер үк ваҡытта заманса ла, милли деталдәр менән булғас, боронғо костюмды ла хәтерләтә. Мода үҙгәреп тора инде ул, хәҙер алтмышын тултырған ҡатындар ҙа тубыҡтан өҫтә итәк кейә башланы. Ундай итәкте студент саҡта беҙ ҙә кейҙек, ул мәлдә йәш, нескә инек, ул беҙгә килешә ине. Итәгеңде ни тиклем юғары күтәрһәң дә, йәшәрә алмайһың. Һәр йәштең үҙенең матурлығы булһа ла, үҙенсәлектәре лә бар. Эстетика этика менән тығыҙ бәйле, саманан ашырға ярамай, тип уйлайым. Беҙ бит әле күкрәктәрен саф көмөштәр, саф гәүһәрҙәр менән биҙәгән ҡатын-ҡыҙҙарҙың тоҡомо, бәҫле, ҡыйбатлы кейем кейеү беҙҙең ҡаныбыҙға һеңгән, шуға ла үҙеңде осһоҙлатырға ярамай.

**С. Буранбаева:** Бөтөн кешеләрҙең оҡшаш итеп, бер үк күлдәктәр кейеп йөрөүе лә килешле түгел. Етмәһә, үҙенә килешкәнде табып кейенеү һәр ҡатын-ҡыҙға бирелмәй. Юғиһә, ысынлап та, йәштәр кеүек кейенгән өлкән ҡатындар күбәйә башланы. Һәр кемдең кейеме үҙенә генә хас булырға тейештер. Шуға ла мөмкинлек булһа, үҙеңдең тегенсеңде табырға бурыслыһың, тип уйлайым, сөнки зауыҡлы итеп кейенеү тап шунан башлана. Үҙәк каналдарҙа модаға бәйле тапшырыуҙар күп, әммә улар йышыраҡ беҙҙең милли уҙаңыбыҙға тура килмәй. Бәлки, үҙебеҙҙең телевидение шундай тапшырыуҙар эшләһә, беҙ ҙә республикала ниндәй модельерҙар, стилистар барлығын белеп, танып ҡалыр инек.

Йәш саҡта артыҡ уйланмаһаң да, өлкәнәйә килә милли кейемгә тартылаһың икән шул. Әлеге мәлдә мин үҙемә килешле туҡымалар эҙләйем. Яңыраҡ кейеҙҙән матур кейемдәр тегеүсе бер белгес менән танышып, бер кейеҙ жилет тектек тә инде. Был эштең башы ғына, шулай уҡ тегенсем менән дә туҡтауһыҙ эҙләнәбеҙ.

**Г. Саламатова:** Таңсулпан апай әйткәнсә, беҙҙең ғаиләлә кейемгә булған зауыҡ әсәйҙән генә түгел, атайҙан да көсте. Атайым ғүмере буйына бер мәктәптә белем бирҙе, шул тиклем матур кейенә торғайны. Төрлө-төрлө эшләпәләре бар ине, оҙон пальтолар кейҙе, кейемендә осраҡлы бер генә лә элемент булманы, бөхтәлеге менән иғтибарҙы үҙенә йәлеп итә торғайны. Уҡытыусы булғас, һинең кейемең дә тәрбиә ысулы, быны мин дә яҡшы аңлайым һәм һөнәремә тап килгәнсе кейенергә тырышам. Үҙебеҙҙең милли кейемдәрҙе лә заманға яраҡлаштырып кейергә була, мәҫәлән, былтыр көҙ ирем бүләк иткән һуғылған шәлде ябынып йөрөнөм. Беҙҙән өйҙә ҡартәсәйемдең һуғылған шәле һаҡлана ине, ул уға үҙенең ҡартәсәһенән ҡалған. Әсәйемдең ҡәҙерләп кенә тотҡан әйбере булды ул, уға тейергә рөхсәт итмәй торғайны, урын менән ҡуша йыйып ҡына ҡуя инек. Аҙаҡтан БДУ-ға Рим Йәнғужиндың музейына тапшырҙыҡ. Шулай ҙа, был шәлде үҙебеҙ ҙә һаҡлай ала инек инде, тигән уй оялап ҡалғайны күңелгә. Хәйбуллаға барып, иңемә һалып ҡарағас та, ысынлап та, был минең әйберем икәненә төшөндөм.

**▸ Башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары биҙәүестәр тағырға ла яратҡан. Һеҙ ниндәй биҙәүестәргә өҫтөнлөк бирәһегеҙ?**

**Г. Саламатова:** Гел боронғо беләҙек, сулпы, алҡаларға өҫтөнлөк бирәм. Мин булмышым менән XIX быуатҡа, ул дәүерҙәге башҡорттарҙың хәленә, шул мәлдә йәшәгән зыялыларҙың аҡылына ғашиҡмын. Ошо биҙәүестәрҙе тағып, үҙемдең шул быуатҡа булған мөнәсәбәтемде белдерәм. Икенсенән иһә, биҙәүестәрҙе махсус эҙләп йөрөмәйем, уларҙы эшләгән кешеләр үҙҙәре алдыма килеп сығып торалар. Шуға ла мин генә түгел, ә был биҙәүестәр ҙә мине ратҡанын аңлайым. Осраҡлы ғына инеп сыҡҡан магазинда миңә тәғәйенләнгән әйбер була, осраҡлы ғына һөйләшеп киткән кеше теге йәки был әйберҙе эшләй белә. Уларҙы хатта яҙмышымды ла хәл иткән әйберҙәр, тип иҫәпләйем, сөнки ирем, тәүҙә биҙәүестәренә күҙ

✓ *"Ир - ат, ҡатын - арба", ти халыҡ мәҡәле, һин уның артынан бараһың, ә ир һинең артыңдан түгел. Әлбиттә, ҡайһы бер мәсьәләләрҙе ҡатындар яҡшыраҡ та, тиҙерәк тә хәл итә ала, әммә быны менән генә ғаиләлә баш була алмайһың.*

һалдым, һуңынан үҙенә иғтибар иттем, тигәйне.

**С. Буранбаева:** Биҙәүестәрҙе мин дә шул тиклем яратам. Борондан уларҙың үҙ билдәләнеше булғандыр инде, мәҫәлән, насар күҙҙән һаҡлағандыр. "Алҡа - йөҙгә пәрҙә, беләҙек ҡулға пәрҙә", тигән әйтем дә бар бит. Шулай уҡ уларҙың сәләмәтлеккә ыңғай тәьҫир итеүенә лә, сирҙәрҙән һаҡлап тороуына ла ышанам. Гөлсәсәк һымаҡ, милли биҙәүестәрҙе ҡыйыу рәүештә йөрөткәндәргә һоҡланып ҡарайым, әлегә үҙем ундай ҙур биҙәүестәр тағырға йөрьәт иткәнем юҡ. Шулай ҙа милли асылымды сағылдырып торған алҡаларҙы, башҡа әйберҙәрҙе йыш тағып йөрөйөм. Тағы ла бер нәмәгә инанғанмын: беҙҙең милли биҙәүестәрҙе тағыр алдынан уларға килешеп торған кейеме лә кәрәк. Салбар кейеп, тәңкәле башҡорт алҡаларын таҡҡан ҡыҙҙарҙы ла бер нисек тә аҡлай алмайым. Был зауыҡһыҙлыҡты күрһәтеп тормаймы икән? Ғөмүмән, үҙебеҙҙә биҙәнеү әйберҙәрен етештереүҙе яйға һалырға кәрәк ине. Әлеге көндә Учалылағы бер ойошманан башҡа быны менән шөғөлләнмәйҙәр ҙә шикелле. Теләнем дә, барып алдым, тигән төшөнсә юҡ беҙҙә. Төрки телле халыҡтар фестивалдәренә барһаҡ, гел генә Ҡаҙағстандан килгән делегацияға һоҡланам.

рҙы кире энергиянан таҙартып торорға кәрәк.

▸ **Дөрөҫ туҡланыу - сәләмәтлек нигеҙе генә түгел, ә матурлыҡ та уға бәйләнгән. Туҡланыуға ниндәй талаптарығыҙ бар?**

**Г. Саламатова:** Ҡартәсәйем бер ваҡытта ла электр сепаратын ҡулландырманы, ҡул сепаратының ҡаймағы бөтөнләй икенсе була торғайны. Һөт һалғанда уның менән сиратлап ултырып әйләндерә инек. Бер әйбер хәтеремдә ҡалған: шул мәлдә ул айыртылған һөттөң күбеген сүмесләп алып эсеп ултырыр ине. Ни өсөн улай иткәнлеген һорағанмындыр ҙа, бәлки, иҫемдә ҡалмаған. "Бер ваҡытта ла йылытылған аш ашамағыҙ. Яңы әҙерләнгән ризыҡ ҡына сихәтле", тип әйтә торғайны. Ысынлап та, гел ошо ике ҡағиҙәне тотоп йәшәне. Хәҙер ҡыуып етә алмаҫтай донъяһың. Кешенең ризыҡҡа өҫтөнлөгө ҡан менән биреләлер инде, улым Рамаҙан бишбармаҡ, һалмалы аш ярата, ниңә ҡорот юҡ, тип һорай ул. Бешеренергә ратһам да, көн дә ҡоймаҡ ҡоймайым, бәлеш һалмайым, сөнки үҙемдең, иремдең, баламдың буй-һынын да нормала тоторға кәрәк. Унан һуң, тәмле бешергән ҡатын-ҡыҙ ғаилә ағзаларын йә ашҡаҙан, йә йөрәк сирлегә әүерелдерә, тиҙәр бит әле.

▸ **"Ҡатын ҡуштаны иргә ярар", тигән мәҡәл бар. Йәғни, ир ҡатынының бер аҙ ҡуштан булыуы ир менән ҡатын араһындағы мөнәсәбәттәрҙе йылы тотоу өсөн кәрәкле сифаттарҙың береһе булғанлығына ишара ителһә лә, башҡорт ҡатын-ҡыҙҙары был кәңәште тотоп бармай, хатта йышыраҡ ирҙәре өсөн әсәйгә әүерелеп китә түгелме һуң?**

икән, ире үҙе лә аңламайынса, янында үҙен көслө итеп тойорға мөмкинлек биргән ҡатын-ҡыҙҙы эҙләй башлаясаҡ. "Ир - ат, ҡатын - арба", ти халыҡ мәҡәле, һин уның артынан бараһың, ә ир һинең артыңдан түгел. Әлбиттә, ҡайһы бер мәсьәләләрҙе ҡатындар яҡшыраҡ та, тиҙерәк тә хәл итә ала, әммә быны менән генә һин ғаиләлә баш булып китә алмайһың. Ҡатын-ҡыҙ мотлаҡ аҡыллы булырға тейеш, шул саҡта үҙеңдә булмаған сифаттарҙы үҫтереп, тормошон яйға һалып ала ул. Әсә булараҡ, тойомлау һәләте лә көслө беҙҙә. Элегерәк үҙемдән өлкән ҡатындарҙы әхирәт итергә тырышһам, бөгөн күберәк йәштәр менән аралашам. Тимәк, шул аралашыуҙар аша үҙемә етешмәгән нәмәләрҙе алғанмындыр, тием.

**Т. Ғарипова:** Ғөмүмән, донъяла бөтөн асыштарҙы ла ирҙәр яһай, был аҡылдың, баштың эшләүе-







# БУЛҺЫН КЕЙЕМЕБЕҘ –

## саф гәүһәр менән биҙәгән ҡатын-ҡыҙ тоҡомо

Уларҙа һатыуҙа ла ниндәй генә биҙәүес юҡ!

**Т. Ғарипова:** Тәбиғи таштар юғары энергетикаға эйә. Борон халҡыбыҙҙа таштарҙың энергияһын теге йәки был ауырыуҙы дауалағанда файҙаланыу кеүек күренештәр булған, әммә улар онотолған. Сөнки Уралда - аҫылташтар өҫтөндә йәшәгән халыҡ был турала яҡшы белгән, тип уйлайым. Әгәр ҙә башҡорттар металдарҙың, таштарҙың энергетикаһын белмәһә, башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарын көмөш, мәрйен менән биҙәмәҫтәр ине. Мәрйен күҙ тейеүҙән һаҡлай, көмөш зарарлы микробтарҙы юҡҡа сығарыу сифаты менән билдәле. Шул уҡ селтәр, мәҫәлән, түште ҡаплап тора, тәбиғи материалдарҙан яһалғанлыҡтан, ул бала имеҙеү функцияһын да яҡшыртҡан, әйтәйек, түш яман шешенән дә һаҡлаған. Беләҙектәр, йөҙөктәр шулай уҡ тәңгә тейеп тора, сәскә үрелгән сәсмәүерҙәр, сулпылар яҡут, аҡыҡ менән биҙәлгән. Аҡыҡ - йөрәк, нефрит - бөйөр, гәрәбә боғаҡ сиренән һаҡлай. Хатта минең бала сағымда ғына түгел, йәшлегемдә лә бәләкәй балаларҙың башлығына мотлаҡ аҡыҡ таға инеләр, ул баланы күҙ тейеүҙән һаҡлай. Алтынға ҡарағанда көмөшкә өҫтөнлөк бирелә, сөнки уның бактерияларға ҡаршы тороу сифаты юғары баһалана, ә алтын насар энергияны үҙенә йыя. Әгәр ҙә алтын алҡа-йөҙөктәр ратһағыҙ, ваҡыты-ваҡыты менән тоҙға һалып, уланы баҫтырабыҙ, шуға күрә уның кәңәшен үтәп йәшәү ауырыраҡ.

**Т. Ғарипова:** Беҙ бутҡаны үҙебеҙ эшләй инек: бойҙайҙы йыуаһың, киптерәһең, шунан төйәһең һәм бутҡа бешерәһең. Шуғалыр ҙа, бутҡа бәләкәйҙән иң тәмле ризыҡ булып күңелгә уйылып ҡалған. Башҡорттар һәр ваҡыт дөрөҫ туҡланған. Буҙа ҡойһаң, талҡан эшләһәң, ҡомалаҡтан әсетке әҙерләп, икмәк һалһаң - сәләмәт туҡланыуҙың нигеҙе була ла ҡуя. Балан йыям һәм ҡулланам, май майын күберәк итеп алып ҡуям. Ҡороттан да өҙөлгән юҡ, ҡунаҡ килеп төшһә, тип, һыуыҡтыста гел ҡаҙы һаҡлайым, бишбармаҡ бешерәм. Беҙҙең йәштә иттән бөтөнләй баш тартһаң да була, тип уйлайым, ярмаларға өҫтөнлөк биреү яҡшыраҡ. Үләндәрҙе таныу, улар ярҙамында сирҙәрҙе булдырмауға өлгәшеү ҙә кәрәк ҡатын-ҡыҙға. Хатта традицион медицина, тип, үләндәргә нигеҙләнгән медицинаны атар инем, сөнки уның тамырҙары бик борондан килә. Кеше ерҙән барлыҡҡа килгән, тәнебеҙҙә ерҙә булған бөтөн элементтар бар, Хоҙай дауаһын да ерҙән биргән. Үлән һәм һөлөк ярҙамында профилактика эшләп торһа, кеше ауырымай.

**С. Буранбаева:** Туҡланыу сәләмәт булырға тейеш, әммә ул тиклем фанатик рәүештә быға өлгәшергә тырышмайым. Шулай ҙа һаулыҡтың нигеҙе - сәләмәт туҡланыуҙа, йәш саҡта быға әллә ни иғтибар итмәһәң дә, бала үҫкән һайын яуаплылыҡты нығыраҡ

**Т. Ғарипова:** Башҡорт ҡатын-ҡыҙының булмышы әсәй һымаҡ, шуға ла өлкәнәйә килә һәр ҡатын-ҡыҙ әсәй сүрәтенә инеп китә. Ҡыҙ бала бәләкәй генә сағынан бушҡа ғына ҡул һелтәп йөрөмәй бит ул, ҡурсағын күтәреп йөрөй. Был беҙгә шул тиклем нык һалынған, бәлки, башҡорт ирҙәре гел һунарҙа, һуғышта булғанға, бөтөн донъя йөгө ҡатын-ҡыҙ иңенә төшкәнгә шулайҙыр. Һәр быуын һайын был яуаплылыҡ нығына килгәндер инде, күрәһең. Башҡорт ҡатыны башҡа милләт ҡатын-ҡыҙҙары кеүек, юхалап, иренә матур ғына өндәшеп, эшләтеп, үҙен көсһөҙ зат итеп күрһәтеп ултыра белмәй. Ул тиҙ арала ирҙең әсәһенә әйләнә. Әсәһенә әйләнгәс, ул, бәлки, иренә ҡыҙыҡ та түгелдер. Йәш быуын ҡатын-ҡыҙҙары был турала уйланырға тейештер. Ҡатын-ҡыҙ ырыҫын яҡлау өсөн ҡатын-ҡыҙға үҙгәрергә лә кәрәк.

**Г. Саламатова:** Таңсулпан апай, минең быуынымдағы ир-егеттәр саҡ ҡына икенсерәк, улар күпкә йомшағыраҡ, иғтибарлыраҡ. Улар яҡшы атай була беләләр, балаларын балалар баҡсаһына үҙҙәре йөрөтәләр. Әммә әлеге йәш быуын тағы ла йомшарһа, нимә булыр, уныһын әйтеүе ҡыйын.

**С. Буранбаева:** Уларҙың йомшарыуында ла ана шул ҡатын-ҡыҙҙың көслө булырға ынтылыуы ята бит. Тәбиғәттә бөтөн нәмә гармонияла, ул тигеҙлек ярата. Икенсе яҡтан, ғаиләлә ҡатын ир позицияһын алырға ынтыла нең билгеһе. Ә ҡатын-ҡыҙҙарға көслө психик энергия һалынған, ул уны дөрөҫ файҙаланһа, ғаиләһе, ире ҙур уңыштарға өлгәшә. Беҙ ир-егеттәр менән бер төрлө түгелбеҙ, беҙ үҙ юҫығыбыҙҙа көслөбөҙ, улар - үҙ юҫығында. Ирҙәр ҡыҫҡа ауырлыҡтарҙы еңелерәк кисерә, улар күкрәктәре менән амбразура ҡаплай, улар яуға күтәреләә, башҡа батырлыҡтарҙы ла башлыса улар эшләй. Оҙайлы ауырлыҡтарҙы ҡатын-ҡыҙ еңеп сыға, йыраҡ булмаған үҙгәртеп ҡороуҙарҙы иҫкә алығыҙ, уны ла ҡатын-ҡыҙҙар еңеп сыҡты. Колхоз-совхоздар бөттө, халыҡта аҡса юҡ, ир-егеттәр күңел төшөнкөлөгөнә бирелде. Ҡатын-ҡыҙ арҡаһына биштәр аҫһа аҫты, әммә ғаиләһен ҡараны, балаларын үҫтерҙе һәм был көрсөктән алып сыҡты. Һуғышта ла тыл ныҡлы булғанға еңгәнбеҙҙер, тип уйлайым. Оҙайлы ауырлыҡтарҙы барыбер ҡатын-ҡыҙ ғына күтәрә ала.

▸ **Беҙ бөгөн ҡатын-ҡыҙҙың матурлығы, уның йәше тураһында күп һөйләштек. Шул уҡ мәҡәлдәрҙә ҡатын-ҡыҙ ғүмеренең, хатта ир-егеттәрҙекенә ҡарағанда, ике тапҡырға ҡыҫҡараҡ булыуы бәйән ителә. Халыҡ гәүһәрҙәрен тура мәғәнәлә аңларға маташыу дөрөҫ түгел, уларҙың нигеҙендә тәрән фәлсәфә ята. "Ҡатын ғүмере - ҡырҡ йыл" тигәнде һеҙ нисек аңлайһығыҙ?**

**Т. Ғарипова:** Ҡатын-ҡыҙҙың төрлө миҙгеле бар, улар күңелгә бәйле. Үҫмер сағы етеп, умырзаяҡ ҡар аҫтынан сығып, ҡапыл сәскә атҡан кеүек, беренсе тапҡыр ғашиҡ булған осоро бар. Баҫалҡылыҡ килеп, уҡырға, белем алырға тырышыу осоро ла була. Кейәүгә сыҡҡас, тағы бер сәскә атыу осоро башлана. Был бик яуаплы осор, ул, ғәҙәттә, балалар баҡсаһы, мәктәп, эш, өй тирәләй әйләнеп, башкөлләй донъя көтөүгә сумған мәл. Балалар үҫеп етеп, үҙҙәре үҙҙәрен ҡарарлыҡ мәлгә еткәс, ҡатын-ҡыҙҙа тағы сәскә атыу осоро башлана. Ул сама менән 40-45 йәшкә тура килә. Ниһайәт, үҙен донъяға гүзәл зат булып яралғанын, ҡатын-ҡыҙға хас бәхетте кисерергә тейешлеген аңлай, уның асылы асыла. Ҡатын-ҡыҙҙың хуш еҫ бөрккән сағы, тиҙәр ине был осор тураһында боронғолар. Ҡыҫҡа булһа ла, был осорҙа тулы ҡанлы ҡатын-ҡыҙ тормошо менән йәшәп алаһың. Муйыл да сәскә атҡас, тәүлектең бер мәлендә генә айырыуса нык хуш еҫ бөркә. Ҡатын-ҡыҙҙарҙың да тәбиғи матурлығы асылып, нур бөрккән сағы була.

**Г. Саламатова:** Ҡырҡ йәшкә тиклем ҡатын-ҡыҙ тәжрибә туплай, йыйыр хаталарын йыйып бөтә, уңыштың нимә икәнен татып ҡарай. Үҙем ошо мәлгә аяҡ баҫып килгәнгә күрә, уның ябай осор түгел икәнен төшөнәм. Ә ҡырҡты уҙғандан һуң, ошо тәжрибәңде ҡулланып йәшәй башлайһың. Яңыраҡ берәү: "Эй, ғүмер уҙҙы, илле бишкә еттем, хәҙер киләсәк тураһында хыялланыу ҙа дөрөҫ булмаҫ инде", - ти. Мин үҙемдең бөтөн йәштә булған сағымды ла яратам. Минең яңынан ун һигеҙгә, егерме бишкә, хатта утыҙға ҡайтҡым килмәй, минең бөгөнгө ҡырҡҡа етеп барған осором оҡшай. Ҡырҡ йәшемдәге күңел һәм физик торошомдо ла дөрөҫ самалайым. Илле йәшемде лә үҙ итеп ҡабул итәсәкмен.

**С. Буранбаева:** Ҡатын-ҡыҙҙың был донъялағы төп бурысы - әсә булыуҙа. Ҡырҡҡа тиклем ул ана шул бурысын үтәйҙер. Ҡырҡҡа тиклем балалар өсөн генә йәшәһә, ҡырҡтан һуң башҡа төрлө уйҙар, маҡсаттар барлыҡҡа килә. Илле йәшлек матур ҡатын-ҡыҙ булмай, тигән ти бер ир-егет. Минеңсә, иллелә лә, алтмыш-етмештә лә күркәм булып ҡалырға була һәм кәрәк тә; был гүзәл заттың үҙенең ҡулынан килә. Йәшемде йәшермәйем дә, ҡыҫҡырып та йөрөмәйем. Бөгөнгө үҙемде, күңел торошомдо шул тиклем яратам, хатта үҙ-үҙем менән камиллыҡта йәшәйем, тип әйтер инем. Сөнки был тормоштан нимә теләгәнемде, кешеләр менән нисек һөйләшергә, сәхнәлә нисек уйнарға икәнен беләм. Ошо аҡылым менән йәшәһәм, илле бишемде лә, алтмышымды ла ратасаҡмын. Матурлыҡ йәшлектә генә түгел ул, һәр йәштең үҙ матурлығы бар.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Хоҙай ҡатын-ҡыҙҙы барлыҡҡа килтергәндә уға донъяға аһәңлек, һөйөү һәм матурлыҡ алып килеү бурысын йөкмәткән, тиҙәр. Нескә генә ҡатын-ҡыҙҙа матурлыҡтан тыш, көслө затты хайран итерлек көс тә, ҡеүәт тә, аҡыл да бар. Донъяның тотҡаһы ул ҡатын-ҡыҙ, шуға күрә ырыҫыбыҙҙы, ҡәҙеребеҙҙе белеп йәшәйек. Байрам менән һеҙҙе, хөрмәтле гүзәл заттар, ратып, ратылып ғүмер итегеҙ!**

**Ләйсән НАФИҠОВА**
**әңгәмәләште.**

***✓ Иртәнге кискә үк йыртҡыстың уҫлаптайын уның аяҡ аҫтына килтереп ырғытмаһамы. Теп-тере көйөнә! Хәлен алғас, ауыҙын шаҡарып бәйләр ҙә. Хәле бөткән бүре башын ҡарға тыға ла ята бит ул. Йәнәһе, йәшеренә.***



Иҙрис НОҒОМАНОВ

# Сәм

(Хикәйә)

Наил Вәлиев һүрәте.

Ҡот осҡос геүләү. Тетрәнеп торған тирә-яҡ ҡапыл күҙ ҡамашыр яҡтылыҡҡа мансыла. Тәү ҡарашҡа матур ғына күренгән сәйер нурҙар ни аралалыр яман яндырып ала. Тән ҡурыша, тире ҡубарыла, түҙер әмәл ҡалмай, был тирәнән тиҙерәк тороп ҡасҡы килә. Әммә ҡасыу түгел, ҡыбырларлыҡ та әмәл юҡ. Ә теге яҡтылыҡ өтә, бешерә генә. Мейе ҡайнай, зиһен тарҡала. Әллә ахырызаман тигәндәре ошомо?..

Һушһыҙ ятҡан Зәй тертләп китте лә, бөтә кәүҙәһе тартыша башланы. Ғазаплы тартышыу: һыҙланыуы үҙәккә үтә. Уның һыңар аяғы менән ахирәт тупһаһына баҫып ҡарағандан һуң, ҡабат фани донъяға әйләнеп ҡайтыуы ине, буғай. Тик донъяның фани тигәндәре яҡты була, ә был... Бында дөм-ҡараңғы. Ҡараңғы һәм һыуыҡ. Ныҡ һыуыҡ. Ҡалтырата. Ҡайҙа юғалды баяғы ҡайнар нурҙар? Бер аҙ ғына йылытып китһәгеҙ ине. Әллә унын бары төш кенә булдымы? Һаташыу ғынамы? Уф-ф, тағы тартыштыра. Соңҡаһы сатнай. Әллә күҙҙәре лә күрмәй инде. Шулай була күрмәһен.

"Эй, әҙәми зат! Эй, кеше! Ни сәбәптән өйөңдә генә ултырмайһың? Йөрөйһөң, йөрөйһөң, ҡайҙа, ни артынан китеп барғаныңды үҙең дә белмәйһең..." Башкөллө ҡараңғылыҡҡа сумып ятҡан Зәйҙең хәтеренә, ни эшләптер, кинәт ошо бер шәп фильмдағы уйға һалыр һүҙҙәр килеп төштө. Икһеҙ-сикһеҙ тундра киңлектәрен егелгән боланда гиҙеүсе егеттең әллә асырғанып, әллә һоҡланыуҙан әйткән һүҙҙәре. Урынһыҙғамы, әллә урынлымы, ҡапылда уныһына төшөнә алманы. Шәт, был шыҡһыҙ донъя буйлап, ысынлап та, ышанысЛы боланың, ә башҡорт өсөн арымаҫ-талмаҫ арғымағың барында ғына йөрөү кәрәктер. Йәйәүленең юлы ырамай, шунлыҡтан эше лә бешмәй. Бына әле үҙенең ҡайҙа ятҡанын иҫләмәгән Зәйҙеке кеүек. Ысынлап та, ни ҡарап йөрөнө ул? Ҡайҙа ята? Ниндәй юлдар менән килеп тарыны был күҙгә төртһәң күренмәҫ ҡараңғы урынға? Һорауҙар, һорауҙар... Һорауҙар күп, ә яуап юҡ. Ул үлтереп зәңкегән мейеһен күпме генә көсөргәндереп ҡараһа ла, хәтеренә әлеге халәтен асыҡларлыҡ бер ни ҙә төшөрә алманы. Күрәһең, башын ныҡ бәргән.

Зәйҙең әле сүп ҡыбырлатырлыҡ та көсө юҡ. Өҫтәүенә, янъяҡлап ниҙер ҡыҫа, күкрәк тултырып һулыш алырға ла ирек бирмәй. Үҙе өшөмәгән дә һымаҡ, ә ҡалтырата. Хәйер, ҡалтыранһын әйҙә. Дерелдәп ҡалтыраған тәнгә һалҡын үтеп инә алмай. Ул арҡаһына йәбешкән сирҡандырғыс кейем еүешләгән, ҡаҡ тубығын өтөп барған боҙ һалҡынлығын тоя, әммә шуларҙан ҡотолор әмәлен таба алмай. Ул хәрәкәтһеҙ. Уны ғәләмәт ауыр ниҙер баҫып тота. Бына-бына иҙеп ташлар төҫлө. Ысынлап та иҙеп ҡуйһа?..Ошо уйҙан уға ҡурҡыныс булып китә.

Барлыҡ ҡына ҡеүәтен туплаған Зәй ҡулдарын ҡыбырлатмаҡсы. Бейәләйһеҙ ҡулы һалҡынлыҡҡа төртөлдө. Бәй, ул ҡар ҡатламы аҫтында ята түгелме? Эйе, ҡар аҫтында. Нисек килеп сыҡты былай? Мәгәр тәнгә һылашып торған епшек ҡатлам үтә ҡалын булып сыҡһа? Ул сағында бәхил булығыҙ, һәммәгеҙ ҙә!.. Йәнде өҙөр әлеге уйҙан Зәйҙең йөрәге тағы жыу итеп ҡала, барлыҡ ағзалары буйлап ҡайнар тулҡын үтә. Маңлайына бөрсөк-бөрсөк һалҡын тир бәреп сыға, ләкин ир быны күрмәй ҙә, тоймай ҙа. Шулай уҡ кешеләрҙең, һуңғы төйәк, тип атаған урыны ошонда булырмы? Был ерҙә ғәзиз һөйәктәрен таба алырҙармы берәй заман?..

Һөйәктәрен? Йо-оҡ! Йән хаҡына, бер бөртөк ғүмер өсөн айҡашҡан йән эйәһенең көсө, ихтыярынан тыш, ике-өс, хатта ун тапҡырға артып китә, имеш. Быны фән ғали йәнәптәре үҙе иҫбат иткән. Шулай булғас, ни эшләп Зәй ошо килеш тыныс ҡына ятып, бот һонорға тейеш. Булмаҫ! Уны балалары көтә. Йәш, һөйөклө ҡатыны көтә. Ниһайәт, тәҙрәнән күҙен алмаған ҡарт әсәйе... Улар ни эшләрҙәр? Уларҙың өмөтөн аҡламаҫҡа Зәйҙең хаҡы юҡ! Ир, барлыҡ һыҙланыуҙарын еңеп, туларға тотондо. Ҡулдарҙы иреккә сығарып алғанда инде. Сығарыр. Уны көтәләр. Әһә! Тырышҡан ташҡа ҡаҙаҡ ҡаҡҡан: булдырҙы лаһа! Оҙаҡ ятыуҙан талсығып ойой башлаған ҡулдар хәрәкәткә килде. Тын алыуы ла иркенәйә төшкәндәй.

Артабан тырышырға. Үҙүҙенде аяп торор мәлме? Һине көтәләр... Зәйгә ҡанаттар үҫеп сыҡтымы ни!

Боҙ ҡатыш ҡарҙы сапсыйтырнай торғас, бармаҡтары иҫ белмәҫ хәлгә етте. Әллә туңып ҡаттылар, әллә өҙөлөп төштөләр. Хәҙер һыҙланыу-ауыртыныу ҙа, әрнеү ҙә, башҡа тойғо ла юҡ. Башында бары бер генә теләк - үлемесле ҡар тотҡононан ҡотолоу теләге. Ҡырталаша торғас, кипсәлеп ятҡан урынынан бер аҙ ғына шыуышып ҡуйған кеүек булды. Бына бит азатлыҡҡа табан юл башы! Йәшәүгә юл! Башланғысы бар икән, дауамы ла, унан ахыры ла булыр. Шыуышып та ирекә сығырға мөмкин. Ә ниңә, ҡорт ғүмере буйына шыуышып көн күрә, шулай ҙа азат йәшәй. Зәй, әлбиттә, серек алма эсендәге ҡорт түгел, тик ваҡытлыса ошо бөжәк көнөнә ҡалғасың ҡалай итмәк кәрәк? Аҙға ғына, бик аҙға ғына түҙергә тура килә инде.

Аһ, ҡәһәрең! Ҡыуанысы әллә иртәрәк булдымы? Саңғылар ебәрмәй ҙә. Ҡыштың көнө һунарсы өсөн һәр саҡ иң кәрәкле әйберҙәр хәҙер килеп әжәл ҡоралына әүерелдеме шулай уҡ? Булмаҫ! Уларҙан да ҡотолоу юлы табылырға тейеш. Эй, йәшәйеш! Һынауҙарыңды бер-бер артлы ебәреп кенә тораһың. Яҡты донъяға яр һалған тәүге ауаздан башлап, һуңғы көндәреңәсә, хатта аҡтыҡ сәғәттәреңә тиклем һинең алдыңда һынау тотабыҙ. Зәй өмөтһөҙлөккә бирелә бара кеүек. Уны бына-бына рух төшөнкөлөгө ялмап алмаҡсы. Ошоно тойған ир ҡайҙандыр барлыҡҡа килгән ғәйрәтен туплап, алға ынтылды. Ғәжәп, шунда уҡ бер аяғы быймаһынан һурылып сыҡты. Икенсеһен сисеүе ҙур ҡыйынлыҡ тыуҙырманы. Бына ул тағы бер имтиханды уңышлы тапшырҙы. Ваҡытынан алда төшөнкөлөккә бирелеп, юғалып ҡалырға ғына ярамай.

Иркенлек ишараты тойған Зәй, ниһайәт, ынтылып, билендәге бысағын алыр форсат тапты. Хәҙер инде ул үлмәҫ. Ул ҡотоласаҡ! Аяуһыҙ ҡаршылыҡ күрһәткән ҡарҙы телгеләй-ваҡлай ул алға шыуышты. Был юлы йылдамыраҡ. Ҡорал ҡорал инде. "Ир маҡтаныр, ҡорал эшләр", ти торған ине өләсәһе мәрхүмә. Ҡалай хаҡ һүҙҙәр! Туҡта, бер аҙ хәл йыйыу кәрәк. Ҡапыл ҡыланыуҙан янып ҡуйыуың бар. Зәй көс-хәл менән арҡаһына әйләнеп ятты. Рәх-хә-әт! Әкрен-әкрен генә булһа ла зиһенене асылып, хәтере лә ҡайта кеүек. Дөм-ҡараңғыла ҡолағы төбөндә йыуаш Йомабайҙың үҙе йомшаҡ, үҙе яғымлы ғына тауышы ишетелеп киткәндәй...

- Һине-ең атаҡлы һунарсы исемен күтәреп йөрөүең, - ти ул яһалма йылмандап, - үәт борон булған ул һунарсылар! Тәрән ҡарҙа бүрене баҫтырып тотҡандар. Саңғыла! Яланғас ҡул менән!

- Нимә тинең? - Быныһы Зәйҙең үҙ тауышы.

- Нимә ишеттең...

- Намыҫыма теймә, мин...

- Тейеү менәнме, барыбер хәлендән килә торған эш түгел. - Ҡалайыраҡ уҫал әйтте, ә, йомоҡ. Йәнгә ҡаҙалды һүҙҙәре, йөрәкте телде.

- Һин мине белмәйһең икән әле, дуҫ.

- Белгәнгә әйтәм дә...

Һабаҡташ дуҫтар араһында, көтмәгән ерҙән, бына ошолайыраҡ һөйләшеү булып алды. Улар күмәк инеләр. Башҡалар ҙа өндәшмәй ҡалманы. Иһаһайлашып көлөштөләр. Шуныһы үтә зитына тейҙе. Ул кисте Йомабайҙың бер урыҫта байтаҡ "хеҙмәт итеп" ҡомо ҡойолорға торған "өр-яңы" "Жигули"һын йыуалар ине. Һүҙгә-һүҙ ялғанды, әкренләп машинанан донъя эштәренә күстеләр, һунар кәсебенә лә ҡағылдылар. Ана шунда Йомабай үҙенең кемлеген күрһәтте. Кластарында иң күндәм, иң һәлкәү һаналған тиген йыуаш түгел икән дә. Ҡыҫҡа ғына ошо әйтеш үҙен әллә кемгә ҡуйып йәшәгән Зәйҙең тормошҡа ҡарашын, үҙ-үҙенә бирә йөрөгән баһаһын шул урында баштүбән әйләндерҙе лә ҡуйҙы. Бешкәнерәк, зыялыраҡ әҙәм ауыҙынан ишетһә, бәлки, иғтибар ҙа итмәгән булыр ине. Бер эшкинмәгән, ғүмере буйына лаҫкылдатып һаҫыҡ ферма тиҙәген иҙгән меҫкен бәндә Зәйҙең - тирә-яҡта даны сыҡҡан бүре аусыһы, егерҙың - волчатниктың сәменә тейгәндәй һүҙҙәр әйтһен әле. Кемдән-кемдән, ә уның ише шыр наҙан шымтояҡтан быңдайын һис көтмәгәйне. Хәйер, эсеп алған кеше ауыҙына ни килмәҫ, тип ҡул һелтәргә лә була ине: бер ҡолағынан инде, икенсеһенән сығып китте - и вәссәләм. Тик Зәй ундайҙарҙан түгел. Иҫеректең уйлағаны теләндә, тимәк, ул айыҡ сағында ла...

* * *

Ул төндә сарсап уянған Зәй ошондайыраҡ күңелһеҙ уйҙарға бирелеп ятты. Шунан ҡарар итте: нисек тә булһа урынына ултыртыу кәрәк үҙ баһаһан белмәгән йомоҡто. Нисек итеп? Бүре һынлы йыртҡысты яланғас ҡул менән тотҡандар, тип әйтеүе генә анһат. Тотор алдынан уны ҡыуып етергә, башын ҡарға сумырып, ауғансы арытыу кәрәк бит әле. Бәлки, бая уйлағанынса, онотор ға ла ҡуйырғалыр? Әммә ләкин онотола буламы ундай һүҙҙәр, шайтан алғыры! Һинең һунарсы булып йөрөүең, имеш. Уух, шымтояҡ! Ҡылйыуғыс! Кемдән-кемдән, тик һинән көтмәгәйнем был һүҙҙәрҙе. Икәү ара ғына булһа бер хәл. Тегеләре лауылдашып көлөшмәгәндә лә әле... Яҡын күреп йөрөгәндәрең араһында ла күрә алғандан алмағаны күберәк, һәр ҡайһыһының эсен ярып ҡарап булмай. Төптә юҡҡа ғына, берәү менән үтә ныҡ дошманлашма - аҙаҡ дуҫлашып китеүең бар, икенсе менән саманан артыҡ дуҫлашып барма - һуңынан хас дошманға әүерелеүең мөмкин, тип әйтмәгәндәрҙер. Хәҡиҡәттең ошондай әсеһе элек-электән килә торғандыр. Дуҫ һанаған кешендең, мәрәкәгә бөгөп булһа ла, аҫтыртын төрттөргән һәр наҡаҡ һүҙе йөрәккә яҡын ҡабул ҡылына ла, һәләк ауыр тәьҫир итә ҡайсаҡ. Шул урында башҡа берәйһе булғанда Зәй, моғайын, ыжлап та бирмәҫ ине. Ысын. Ә былай... Ни айыҡ, ни иҫерек ғәмдең һаһылдашҡаны, йәнен үртәп, әле булһа яңғырап киткәндәй.

Ә шулай ҙа ошо ҡәҙәре көйәләнерлек сәбәбе бармы? Бүре аулау борон-борондан килгән ихтирамға лайыҡ кәсеп. Хатта кәсеп кенә лә түгел. Ул ҙур оҫталыҡ, сыҙамлылыҡ, көс талап итә. Талымһыҙ кейекте тоҙаҡҡа эләктереп тә, ағыулап та, суҡмар менән дөмбәҫләп тә аулағандар. Ләкин тере килеш алып ҡайтыу һирәктәрҙең, бик һирәктәрҙең генә хәленән килгән һәм оло мәртәбә һаналған. Быныһын Зәй яҡшы белә, шуға күрә лә был хаҡта күҙенә төртөп тороуҙары икеләтә намыҫына тейә. Һы, беҙ әллә йүкәнән ишелгән: ата-бабам, хатта, боланды баҫтырып тотҡанды... Ныу сәмгә тейҙе бит, ә. Сәм менән ҡара көнсөллөк араһы - бер аҙым. Көнсөллөктән күрә алмаусанлыҡҡа ла алыҫ ара ҡалмай. Шунан ҡурҡмаймы икән? Шаяртып әйттем, тигән була бит әле. Хәйләләшмә, кинәйә төбөндә ишара. Бигерәк тә Йомабай һымаҡ йомоҡтарҙың. Үҙҙәре бер нәмәгә эшкинмәһәләр ҙә, телдәре-е... Ике-өс көндән, юҡ, иртәнге кискә үк йыртҡыстың уҫлаптайын уның аяҡ аҫтына килтереп ырғытмаһамы. Теп-тере көйөнә! Хәлен алғас, ауыҙын шаҡарып бәйләр ҙә. Хәле бөткән бүре башын ҡарға тыға ла ята бит ул. Йәнәһе, йәшеренә. Күҙҙәренде генә йәшереп бөтә хәүеф-хәтәрҙән дә ҡотола алһаң икән...

* * *

Өлпәрәм булһа ла һыҡытып ятҡан ҡарҙы табанына шыма илек ҡамусы ҡағылған ғәләмәт яҫы саңғылары менән ярып барған Зәй асыулы уйҙарынан һаман арына алмай. Йомабай дуҫына яман үпкәләгән. Уйламайыраҡ ысҡындырған йомоҡ уның хәтерен, ысынлап та, ныҡ ҡалдырған. Шулай булмағанда, шыпа тыныс әҙәм ошо ҡәҙәре ярһыр инеме. Икенсе яҡтан, ярһыу ҡатыш ҡабалан эштең рәте сыҡмай торған. Сабырыраҡ ҡыланып, абайыраҡ эш иткәндә... Ҡыҫҡаһы, тынысланыу кәрәк.

Йәш ҡарҙы кисеүе ифрат ауыр, йонсотҡос. Әллә инде кире боролорға ла ҡуйырға. Әлегә һуң түгел. Әһһ-ә, тегенең эсен йылындырыр өсөнмө? Артын тырнап көлһөн өсөнмө? Юҡ инде, башланған эш - бөткән эш, уйлағанды аҙағына еткермәйсә туҡтап ҡалыу ярамай. Был Зәйсә түгел. Бер дөрләгән сәмде һүндерәүе, ай-һай, анһатмы? Улмы һуң ярты юлда баҙап ҡалыр кеше? Йәне сыҡһа сығыр, ете ҡат тиреһе туналыр, әммә үҙенекен итмәйсә ҡуймаҫ. Тап ошо холҡо арҡаһында уны күптәр хөрмәт итһә, өнәп етмәүселәр ҙә байтаҡ ауылда.

Зәй тигәндән, уның ике ҡолағына мулла ҡысҡырған исемшәрифе Зәйнулла булыр. Ауылдаштары ошоно әллә белмәй, әллә белә күрә юрый ҡылана - Зәй, ти ҙә ҡуялар. Ҡыҫҡа ла, тиҙ ҙә. Үҙе күнегеп бөткән инде, иғтибар итмәй. Киреһенсә, берәү, Зәйнулла, тип өндәшә икән, сәйер ишетелә кеүек.

**(Дауамы бар).**

✓ *"Иртән иртүк торабыҙ ҙа, юл картаһы буйынса бөгөн нисә километр үтәсәгебеҙҙе билдәләп алабыҙ. Мәҫәлән, 17 сәғәткә тиклем 40 саҡрым уҙып, Ҡолғонанан Красноусол ҡасабаһына тиклем барып етергә тейешбеҙ".*

*АҒИНӘЙҘӘР ҠОРО*

# ХӘЙБУЛЛАЛАР ҘА "АЛТЫН ТИРМӘ" ҠОРҘО

**Февраль айының һепереп кенә буранлап торған бер көнөндә Хәйбулла районының Таналыҡ ауыл биләмәһенә ҡараған ауылдарҙан - Подольск, Бакаловка, Әҙелдән ағинәйҙәр ултырған машиналар ылау-ылау булып Таштуғайға юлланды. Милли кейемдәр кейгән, биҙәнгән-төҙәнгән был ҡатын-ҡыҙҙар ҡайҙа ашыға тиһегеҙме? Таштуғайға, "Алтын тирмәгә"!**

Ә Таштуғайҙа ҡоҙа көтәләрме ни! Мәҙәниәт йортонда күңелле көйҙәр яңғырай, самауырҙар борҡоп ҡайнай. Фойела Таштуғай ағинәйҙәренең ҡул эштәренән торған күҙҙе ҡамаштырырлыҡ күргәҙмәһе урынлаштырылған. Был ауыл ағинәйҙәренең һәр береһе оҫта, егәрле. Мәҫәлән, Зөһрә Латипованың сигелгән мендәр тыштары, карауат япмалары, ҡулъяулыҡтарынан күҙҙәрҙе айырып алып булмай - иҫ киткес зауыҡ менән һайланған төҫтәр гөлләмәһе, сигелгән әйберҙәренә күҙ нурҙары ғына түгел, күңел йылыһы ла ҡушылғандай. Зөлфирә Рахманғолованың сағыу биҙәктәр һалып, селтәрләп бәйләгән кофталары, жилеттары, тере сәскәне хәтерләтеп бәйләгән тәпешкәләре иң нәзәҡәтле ханымдарҙың да ихтыяжына яуап бирерлек. Рәхимә Үлйәбаеваның талантына ла хайран ҡалырлыҡ! Шундай күп төрлө йүнәлештә, төрлө материалдар менән эш итә ул. Балсыҡтан, ҡамырҙан, ҡағыҙҙан, таштарҙан, ҡабырсаҡтарҙан, емеш төштәренән яһалған һындар, вазалар, картиналар күҙ яуын алырлыҡ. Шулай уҡ ул таҫмалар менән сигеү оҫтаһы ла.

Сәхнәгә төрлө төҫтәге сағыу таҫмаларҙан тирмә ҡоролған, шунда уҡ һуғылған балаҫ, ҡорма юрғандар йәйелгән урындыҡта ауыл оҫтаһы Факил Күсәков һырлап эшләгән сәй сервисы һәм башҡа төрлө һауыт-һаба теҙелгән. Сигеүле таҫтамалдар ҙа сәхнәлә үҙ урынын тапҡан.

Ниһайәт, ауыл биләмәһе ағинәйҙәре йыйылып бөтөүгә, сара башланып та китте.

- Беҙҙең районда ағинәйҙәр хәрәкәте эшләй башлау менән, ысынлап та, ауылдар тормошо йәнләнде. Был ойошма хәҙерге саҡта бик кәрәк булған саралар башында тора. Тағы ла әүҙемерәк булығыҙ, үҙ тирәгеҙгә күберәк ҡатын-ҡыҙҙарҙы йәлеп итегеҙ, - тине район мәҙәниәт бүлеге етәксеһе Лариса Мәмбәтова ҡорҙо сәләмләп.

Артабан район "Ағинәйҙәр ҡоро" етәксеһе Миңзифа Ишемғолова район ағинәйҙәр ҡороноң эштәре менән, ошо йылға эш планы менән таныштырҙы. Шулай уҡ башҡа райондар ағинәйҙәренең эш тәжрибәһе тураһында ла һөйләп китте.

- Районда ағинәйҙәр ҡатнашлығында "Аҡ тирмә" марафонын, йәғни халҡыбыҙҙың тарихы, ғөрөф-ғәҙәттәре, ауыҙ-тел ижады буйынса белемдәрҙе барлау бәйгеһен башлап ебәрҙек. Иң тәүге сара Сиҙәм ауылы биләмәһендә үтте. Бөгөн Таналыҡ ауыл биләмәһе ағинәйҙәре көс һынаша. Ауыл биләмәһендә еңеүсе команда зона кимәленә сығасаҡ. Һуңынан дүрт зонала еңеүсе дүрт команда район бәйгеһендә көс һынашасаҡ.

Таналыҡ ауыл хакимиәтенең эштәр идарасыһы Ольга Пономарева йыйылғандарҙы тәбрикләп, командаларға уңыштар теләгәндән һуң, кисәне алып барыусылар ағинәйҙәрҙе уйын шарттары менән таныштырып үтте. "Йәш өләсәйҙәр", "Таналыҡ һылыуҙары", "Мәтрүшкәләр", "Әҙелдәр-ғәҙелдәр" командалары бер-береһен сәләмләп, девиз һәм йырҙары менән таныштырғас, уйын-конкурс башланып та китте. Башҡорт халыҡ ижадына бәйле "Алтын тирмә" һорауҙары бик мауыҡтырғыс һәм ҡыҙыҡлы булды. Мәҡәл һәм әйтемдәрҙең дауамын әйтеү, йомаҡтарҙың яуабын табыу кеүек уйындар бик көсөргәнешле барҙы. Яҡташ яҙыусыларыбыҙ тураһындағы викторина ла бик ҡыҙыу бәхәстәр тыуҙырҙы, улар һәм уларҙың әҫәрҙәре тураһында яңы мәғлүмәттәр еткерелде. Халҡыбыҙҙың оното-ла барған уйындары иһә бигерәк йәнле үтте - ағинәйҙәр кинәнеп "Боҙоҡ телефон", "Йәшерәм яулыҡ", "Аҡ тирәк, күк тирәк", "Беҙ, беҙ, беҙ инек" уйындарында көс һынашты. Бына шундай ҡыҙыҡлы бәйгеләрҙән һуң дүрт команда араһынан Таштуғай ауылы ағинәйҙәре еңеүсе тип иғлан ителде.

Әле улар "Алтын тирмә"нең зона этабына әҙерләнә.

**Фәриғә КҮСӘКОВА.**
**Хәйбулла районы Таштуғай ауылы.**



*ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!*

**24 февраль көндө 7 ир-егет Баймаҡтың үҙәк майҙанынан саңғыла Өфөгә юлланғайны. Был марафонды улар Бөйөк Еңеүҙең 70 йыллығына арнаны. Егеттәр ун көн эсендә 400 саҡырым юл үтеп, 5 март 14 сәғәттәр тирәһендә баш ҡаланың Еңеү Паркына килеп етте. Саңғысылар Баймаҡтан килтерелгән сәскәләр гөлләмәһен Еңеү паркындағы Советтар Союзы Геройҙары Александр Матросов (Шәкирйән Мөхәмәтйәнов) һәм Миңлеғәле Ғөбәйҙуллиндар һәйкәленә һалды. Уларҙы бында баш ҡала халҡы, ветерандар, яҡташтары йыр-бейеү, алҡыштар менән ҡаршы алды.**

# БАЙМАҠТАНМЫ?.. ӨФӨГӘМЕ?.. САҢҒЫЛАМЫ?..

Бөйөк Еңеүҙең 30 йыллығын ҡаршылаған саҡта, 1975 йылда, Башҡортостандың беренсе баш ҡалаһы Темәстән старт алып, ошо юл менән Өфөгә ун саңғысы килеүе тураһында ишетеп белә инек. Ошо марафонды ҡабатларға дәрт иткәс, әлеге егеттәр башта бик ентекләп үтеләһе юлдың планын өйрәнгән, осраясаҡ ҡаршылыҡтарҙы иҫәпкә алып, барлыҡ факттарҙы бизмәнгә һалғандан һуң ғына юлға сығырға тәүәкәлләгән...

Еңеү паркындағы тантана мәлендә, уңайын тура килтереп, марафонсылар менән аралашып алдыҡ. Уҙыштың иң өлкән ҡатнашыусыһы (уға 54 йәш) Хәйҙәр Моталлапов был ун көндө үҙ ғүмерендәге иң сағыу, иң ҡыҙыҡлы ваҡиға тип атаны. "Туғандарым өсөн дә, минең өсөн дә бик етди һынау булды был. Әммә уны беҙ лайыҡлы үтә алдыҡ. Шул ҡыуандыра мине", - тине ир-уҙаман. Район хакимиәтенең физкультура һәм спорт бүлеге мөдире Айнур Әминев юл буйында осраған ауылдарҙа уларҙы көтөп торған ветерандарға, ауыл биләмәһе башлыҡтарына, өйҙәрендә ҡундырған, ашатҡан, эҫе сәй эсергән, мунса яғып ҡуйған ихлас ауыл халҡына, мәктәп уҡыусыларына оло рәхмәтен еткерҙе. "Әгәр беҙҙе шулай йылы ҡаршылап, дәртләндереп тороусылар булмаһа, был юлды үтеүе күпкә ҡыйыныраҡ булыр ине", - тине әңгәмәсебеҙ.

Баймаҡ ҡалаһының "Баһадир" физкультура-һауыҡтырыу комплексы директоры, билдәле көрәшсе Илшат ағай Хәмитов, төркөмдөң етәксеһе булараҡ, көнөнә нисә саҡрым юл үтергә кәрәклеген үҙе билдәләр булған. "Иртән иртүк торабыҙ ҙа, юл картаһы буйынса бөгөн нисә километр үтәсәгебеҙҙе билдәләп алабыҙ. Мәҫәлән, 17 сәғәткә тиклем 40 саҡрым уҙып, Ҡолғонанан Красноусол ҡасабаһына тиклем барып етергә тейешбеҙ, тигән маҡсат ҡуябыҙ икән, шуны үтәйбеҙ. Ләкин билдәләнгән аранан ары китке килмәй ҙә ҡуя, малай, арыған тән ял һорай..."

Дүртенсе әңгәмәсебеҙ - Баймаҡ ҡалаһының 2-се мәктәбенән физкультура уҡытыусыһы Рәфис Вәлиев фекеренсә, ошондай артылыш-марафондар был донъяла бер-береңә ярҙам итеп йәшәү кәрәклеген аңларға ярҙам итә."Мин үҙем тағы шуға инандым, - ти ул, - фронт һәм тыл батырҙарына ихтирамыбыҙ арҡаһында беҙҙе һәр ауылда йылы ҡаршы алдылар. Патриотлыҡ идеяһы таныш түгел кешеләрҙе бер туғандай яҡын итә. Башҡортостандан сығып китеп, төрлө фронттарҙа һуғышҡан яугирҙарыбыҙ Берлинғаса йәйәү барып етеп, тыуған ергә ниндәй ғорурлыҡ менән ҡайтыуын үҙебеҙ ҙә татыған кеүек булдыҡ. Был тойғоно бер генә һүҙ менән аңлатып та булмай", - тине Рәфис Вәлиев. Был ялҡынлы һүҙҙәрҙе бүтән саңғысылар - Айҙар Ишбулатов, Азат Сынғыҙов менән Динар Юлдашбаев та йөпләп ҡуйҙы.

**ЙОМҒАҠЛАП...**

**Саңғысылар бөгөнгө марафон менән генә туҡталып ҡалырға уйламай, ахыры. Айнур Әминев йәйге осорҙа тағы берәй оло ваҡиғаға арналған марафон ойоштороп, ошо араны йүгереп йә велосипедта үтеү мөмкинлеген күҙ уңында тотһа, Илшат Хәмитов берәй һыбайлылар акцияһы ойоштороу уйы менән яныуын белдерә. Баймаҡтар был идеяларҙы ла тормошҡа ашырмаҫ, тимә.**

**Илгиз ИШБУЛАТОВ.**



ИНТЕРНЕТТАН



# КИҘЕҮҘӘН...

## шарф һаҡлай

■ Күрәшлек менән яфаланыусы балалар йылдан-йыл күбәйә, етмәһә, был тайпылыш бала үҫкән һайын аҙа бара. Махсус ортокератологик линзалар ярҙамында был сирҙе бала бәләкәй саҡта дауалап була, һәр хәлдә, күҙ мөгөҙсәһенең артабан формаһы үҙгәреүен туҡтатырға мөмкин. Ҡытай ғалимдары үткәргән тикшеренеүҙәрҙә 6 йәштән 16 йәшкә тиклем 435 бала ҡатнашҡан. Һөҙөмтәләр күрһәтеүенсә, ике йыл дауамында был махсус линзаларҙы йөрөткән балаларҙың хәле күпкә яҡшыраҡ. Шуға ла офтальмолог менән кәңәшләшеп, күрәшлекте бала саҡта дауалау уңышлыраҡ буласаҡ, ти улар.

■ Британия эксперттары, киҙеүгә ҡаршы яһалған вакцина пациенттарҙың бары тик 3 процентына ғына ярҙам итә, тип белдерә. Киҙеүҙең вирусы йылдан-йыл үҙгәреп тора һәм медиктар яңы штамдан һаҡлаусы вакцина эшләп өлгөрмәй. Быйыл да был илдә яһалған ванциналарҙың файҙаһы булманы, тигән фекерҙә ғалимдар. Әгәр ҙә өҫтәмә һаҡланыу саралары күрмәгәндә, Бөйөк Британияла ғына киҙеүҙән үлеүселәр һаны һуңғы 15 йыл эсендә иң юғары сиккә етеүе ихтимал. Киҙеү бигерәк тә өлкән йәштәгеләр һәм балалар өсөн ҡурҡыныс. Шуға ла иммунитетты иң ябай ысулдар менән булһа ла нығытыу вакцинаға ҡарағанда файҙалыраҡ буласаҡ. Ә бына Англияла киҙеүгә ҡаршы шарф уйлап тапҡандар. Был шарфтар һауала осоп йөрөгән бактерияларҙан, шулай уҡ химик берләшмәләрҙән һаҡлай. Бының өсөн шарф менән йөҙҙөң аҫҡы өлөшөн һәм муйынды ҡапларға кәрәк. Туҡымаға махсус фильтр ҡуйылған, уны өс ай һайын алыштырып торорға кәрәк. Медицина шарфының дизайн авторы Алекса Нигро. Идея иһә Эндрю Кессперу менән Ари Клэристенфельдуныҡы. Бер тапҡыр метрола китеп барғанда сөскөрөүсе һәм йүткереүсе пассажирҙарҙан һаҡланып, йөҙҙәрен ҡаплап барған кешеләрҙе күргәндән һуң, улар махсус шарф уйлап таба ла инде.

■ Эмоциональ кисерештәр кешенең психикаһына ғына түгел, ә физик сәләмәтлегенә лә йоғонто яһай. Аныҡыраҡ әйткәндә, улар бөйөргә таш ултырыуға булышлыҡ итә. Нью-Джерси штаты (АҠШ) ғалимдары билдәләүенсә, һейҙек ташы ауырыуы менән яфаланған сирләр һау бөйөрлөләргә ҡарағанда көнкүреш конфликттарына, эштәге күңелһеҙлектәргә, аҡса етмәүгә өс тапҡырға йышыраҡ зарлана икән. Әйткәндәй, быға тиклем ни өсөн бөйөрҙәрҙә таш барлыҡҡа килеүен фән аңлата алмай ине. Шуға ла был асыш ауырыуҙы артабан өйрәнергә ярҙам итәсәк. Статистика буйынса, халыҡтың 10 процентының бөйөрҙәрендә таш бар. Уларҙың күптәре был турала белмәй ҙә. Ғәҙәттә, таш урынынан ҡубып, ҡыбырҙаһа йәки бөйөрҙән сыға башлаһа ғына ауыртыу барлыҡҡа килә. Ирегеттәрҙә был сир йышыраҡ осрай.

■ Бөтөн донъя сәләмәтлекте һаҡлау ойошмаһы иң зарарлы медицина ҡоролмалары исемлеген төҙөгән. Унда терегөмөшлө ябай градусниктар ҙа ингән. Табиптар фекеренсә, уларҙы күптән хәүефһеҙерәк төрҙәре менән алыштырырға кәрәк. 2018 йылдан медицина ҡорамалдарында терегөмөш ҡулланыу тыйыла, 2030 йылға тиклем уны бөтөн донъяла тыйыу планлаштырыла.

СӘЛӘМӘТЛЕК ӘЛИФБАҺЫ

**Тәрбиәне бала тыумаҫ элек башлаған кеүек, уның сәләмәтлеген хәстәрләүҙе бәпес алып ҡайтыу хаҡында уйланғанда уҡ башларға кәрәк. Йәғни, һәр сабый планлаштырылған булырға тейеш. Бигерәк тә бала табырға әҙерләнгән ҡатын-ҡыҙ барлыҡ тикшеренеүҙәрҙе үтеп, дауаланып, һуңынан ғына ауырға ҡалһын ине. Юғиһә, беҙҙә киреһенсә килеп сыға: ауырға ҡалалар ҙа, шунан ғына дауалана башлайҙар. Әммә ауырлы саҡта ҡайһы бер препараттарҙы ҡулланыу бөтөнләй ярамай. Ата-әсә ошо теләкте - баланы планлаштырыуҙы - ҡағиҙә итеп алһын һәм һау-сәләмәт балаға ғүмер бирһен һәм сабыйының - ҡыҙмы ул, малаймы - сәләмәтлеген даими рәүештә контролдә тотһон ине.**

# ЯЛҠАУ БУЛМАЙЫҠ!



Ҡыҙ баланы әсәй кеше буласаҡ әсәй итеп тәрбиәләргә бурыслы. Был иң элек ҡыҙ баланың гигиенаһына, уны дөрөҫ итеп йыуындырыуға ла ҡағыла. Сөнки дөрөҫ йыуындырыу ҡыҙҙарҙың енес ағзаһында елһенеүҙәр булдырмаҫҡа ярҙам итә. Хәҙер әсәйҙәр балаға памперс кейҙерә лә, үҙенә эш еңеләйтә. Был һис ярамаған эш. Памперсты көнөнә бер-ике сәғәткә, урамда йөрөгәндә йәки берәй ергә барғанда, бала аҫтын еүешләп, һыуыҡ үткәрмәһен өсөн генә кейҙерергә мөмкин. Ә башҡа ваҡытта ул йүргәктә йәки кейемдә булырға тейеш. Юҡһа, бала памперста оҙаҡ йөрөһә, уның сат араһы сейләнеп китә, аллергик реакциялар булыуы ихтимал, елһенеү, мацерация һ.б. күренештәр башланыуы мөмкин. Эйе, памперстар әсә өсөн бик уңайлы, әммә киләсәктә баланды ниндәй физиологик үҙгәрештәр көтөүен берәү ҙә әйтә алмай.

Ҡыҙҙар үҫә барған һайын, йәшенә ҡарап, уға енси тәрбиә биреү зарур. Ваҡыты еткәс, 11-13 йәштәрҙә ҡыҙҙарҙың күрем циклы башлана. Әсә кеше ҡыҙ баланы ошо ваҡиғаға алдан әҙерләргә тейеш. 11-13 йәшендә ҡыҙҙарҙың күреме килмәй икән, мотлаҡ табипҡа мөрәжәғәт итергә кәрәк. Тимәк, фолликуляр аппаратта ниндәйҙер проблемалар бар. Һәм ҡыҙҙың сәләмәтлеге ныҡлы дауалау талап итә. Ҡайһы берҙә ҡыҙҙар 18-19 йәштә генә табиптарға мөрәжәғәт итәләр. Әгәр ҙә уларҙы әсәләре иртәрәк алып килһә, ул ваҡытта сирҙе кисектерергә була. Ә һуңлаған осраҡта ярҙам итеү мөмкин түгел. Шуны ла әйтергә кәрәк, ҡатын-ҡыҙға тыумыштан әсәнән генетик банк-база бирелә һәм беҙ шуның менән йәшәйбеҙ, тыумыштан һалынған потенциалды - миллиондан ашыу күҙәнәкте яйлап ҡына кәметәбеҙ. Ҡатын-ҡыҙ ошо хаҡта белергә тейеш.

Хәҙер ҡыҙҙарҙы бәләкәй йәштән үк гинеколог тикшерә. Сөнки бәүел-енес системаһында төрлө ауырыуҙар, төрлө кисталар, кольпит, вагиниттар таралыуы күҙәтелә. Ҡайһы бер ваҡытта яралғы икәү булып, береһе икенсеһен "ашауы" ла ихтимал. Хатта бала әсә ҡарынында булғанда уҡ киста барлыҡҡа килә. Улар тиҙ үҫмәй, әммә уларҙың эсендә сәсме, тырнаҡмы һ.б. була. Шуға балаға бер йәш тулғас, тулы медицина тикшереүе үткәрелә һәм ата-әсәләр быға битараф булмаһын ине. Гинеколог бит ҡыҙҙарҙы вагиналь йәки ректаль йәһәттән генә ҡарамай, ә бәләкәй таз һөйәгенең төҙөлөшөн, күкрәк биҙҙәренең нисек үҫеүен, ниндәйҙер тайпылыштар бармы-юҡмы, ағзаларҙың дөрөҫ үҫешәмеюҡмы икәнлеген тикшерә. Әгәр шундай тайпылыштар күҙәтелә икән, бында инде саң ҡағырға кәрәк. Сөнки йәш буйынса һәр ағза үҫешенең үҙенең билдәле күләме бар.

Ниндәй кейем кейергә икәнлеген дә әсәй кеше аңлатырға тейеш. Заман шауҡымына бирелеп, ҡыҙҙар селтәрле, синтетика эске кейем йәки стрингилар кейә. Иң яҡшыһы - кизе-мамыҡ туҡыманан тегелгән кейем. Стрингилар кейгән осраҡта бактериаль вагиноз, кольпит, вагинит барлыҡҡа килеүе ихтимал. Хәҙер ҡыҙҙар салбарҙа йөрөүсән. Әммә киләсәктә әсә булырға теләгән ҡыҙҙар йәки ейән-ейәнсәр һөйөргә хыялланған әсәләр ҡыҙҙарына салбар һайлағанда ла уның ниндәй булыуына иғтибар итергә тейеш. Мәҫәлән, ныҡ тар һәм билдән түбән булған салбарҙар кейеү сәләмәтлек өсөн бик зарарлы. Даими рәүештә шундай салбарҙа йөрөгән ҡыҙҙарҙың янбашында ҡан әйләнеше боҙола, таз һөйәктәре деформацияланыуы мөмкин. Биле түбәнәйтелеп тегелгән салбарҙарҙа йөрөү шулай уҡ һыуыҡ алдырыуға, эске ағзаларҙың елһенеүенә килтерә. Хроник елһенеү йәш саҡта берәүҙе лә борсомай, ә аҙаҡ инде улар барыбер үҙенең мәкерле эшен эшләйәсәк. Хатта бер ерем дә ауыртмай, тигәндә лә бындай ҡыҙҙар мотлаҡ беҙҙең буласаҡ пациенттарыбыҙ.

40 йәштән һуң ҡатын-ҡыҙ ярты йылға, йылына бер тапҡыр мотлаҡ рәүештә гинекологта тикшерелергә, консультация алырға, йылына бер тапҡыр УЗИ, маммография үтергә тейеш. Һөт биҙҙәрен йыл һайын тикшертеп тороу зарур, сөнки күп кенә ҡатын-ҡыҙҙар яман шеш 3-4-се стадияға еткәс кенә мөрәжәғәт итә. Шулай уҡ кәүҙә ауырлығына иғтибар итеү ҙә кәрәк. Ҡапыл ауырлығығыҙ артып йәки ҡапыл кәмеп китте икән, эндокринологҡа барып ҡаралыу кәрәк.

Олоғая бара гормональ фон түбәнәйә башлай һәм был осорҙа организмға өҫтәмә ярҙам күрһәтергә йәки менопауза осорона еңел инергә ярҙам итергә кәрәк. Ә беҙҙең ҡатын-ҡыҙҙар, ғәҙәттә, бер нәмә лә борсомай, борсоған хәлдә инде һуңғы сиккә килеп терәлмәй икән - табиптарға мөрәжәғәт итмәй. Мин эшләгән осорҙа бер генә ҡатын-ҡыҙҙың да профилактика маҡсатында ғына табипҡа килгәне булманы. Дауалауға ҡарағанда иҫкәртеү күпкә еңелерәк һәм яҡшыраҡ. Ләкин ҡатын-ҡыҙҙың ғәҙәттә профилактик тикшереү үтергә ялҡауы килеүсән. Ә бит үҙен ысын ҡатын-ҡыҙ тип иҫәпләүселәр даими рәүештә гинекологҡа, стоматологҡа күренергә һәм... сәстәренә һәр саҡ прическа эшләп йөрөргә тейеш.

**Әлфиә ЮЛДАШЕВА,**
**Республика перинаталь үҙәгенең акушер-гинекологы.**

БЕР КӘЛИМӘ ФЕКЕР...



# ИР ХӘСТӘРЛЕ БУЛҺА...

## ҡатын-ҡыҙ таҫтарлы була

**Был мәҡәлде ишеткәс тә, мәғәнәһенә оҙаҡ ҡына төшөнә алмай йөрөнөм. Ни өсөн тигәндә, мин "таҫтар" һүҙенең нимә аңлатҡанын белеп бөтмәйем, ул шул тиклем ҡиммәтле әйберме икән, тип аптырайым. Баҡтиһәң, был оло йәштәге ҡатын-ҡыҙҙар башына ябынып йөрөй торған оҙон тауар киҫәге булған.**

Һораша торғас, таҫтар тураһында байтаҡ ҡына мәғлүмәт тә тупланды. Элек ҡыҙҙарҙың сәсен үреп, толомдарының осона таҫма бәйләгәндә олораҡ ҡатындар, еңгәйҙәр: "Һинә - кейәү, минә - таҫтар", - тип суҡлап, тартып ҡуйыр булғандар. Сөнки килен төшөргәндә таҫтарҙы бүләккә тараткандар, ул үҙенә күрә бер ихтирам күрһәтеү ҙә һаналған.

Заманса, европалыларса туйҙар үткәреү модаға инеү менән үҙебеҙҙең милли ғөрөф-ғәҙәттәр ҙә онотола бара. Йолаһы бөткәс, һүҙе лә иҫтән сыға, ҡулланылыштан төшөп ҡала, һөҙөмтәлә, хатта халыҡ мәҡәленең мәғәнәһен дә аңламаҫ хәлгә етәбеҙ икән. Шулай ҙа, ни өсөн ире хәстәрле булған ҡатындар ғына таҫтар ябына алған һуң? Минең ҡарамаҡҡа, был мәҡәл нигеҙендә шундай мәғәнә ята: донъя көткән, ғаиләһен ҡараған егәрле ирҙең ҡатынына таҫтар алып бирерлек аҡсаһы булһа, ҡатындың шул таҫтарҙы ябынып, башын ғорур күтәреп йөрөрлөк хаҡы була. Тимәк, ҡатын-ҡыҙҙың абруйы, йәмғиәттәге урыны туранан-тура ирҙең дәрәжәһенә, хоҡҡона ҡарап билдәләнгән. Шулай булмай, ялҡау кешенең йөҙәрләгән, меңәрләгән малы тибенлек утлап йөрөр инеме лә, ҡатынына "байбисә" тип өндәшер инеләрме? Арҡаланыр кешеһе булғанда ғына ҡатын-ҡыҙҙар аяҡтарын ергә ныҡлы терәп тора, шул осраҡта ғына уның һүҙенә ҡолаҡ һалалар, халыҡ әйтмешләй, "эшкә һанайҙар".

Әлбиттә, көслө заттарҙың да, ҡатын-ҡыҙҙарҙың да хоҡуғы тигеҙ булырға тейеш, ләкин йәмғиәттәге ролдәр барыбер айырыла. Береһе етеш тормошта йәшәүҙе хәстәрләһә, икенсеһе ғаиләһендәге рухи донъяның, тәртиптең төп нигеҙҙәрен ҡора, ғөрөф-ғәҙәттәрҙең үтәлеше өсөн яуап бирә. XXI быуатта был бурыстар алмашынып, буталышып бөтһә лә, асылыбыҙҙы үҙгәртеп булмай. Бөгөнгө заманда иһә, моғайын, таҫтарҙы тик бөтөн тормош мәшәҡәттәрен, ғаиләһе һәм үҙе тураһындағы хәстәрҙе хәләл ефетенә йөкмәтә белгән ысын ҡатын-ҡыҙҙар ғына ябына алыр ине. Сөнки көсһөҙ була белеү ҙә - көслөлөк бит.

**Сәриә ҒАРИПОВА.**

✓ *Үпкәләгәндә үҙеңде ҡулға алыу һәм рәнйегәндә ыҙғыш сығармау - бына нindәй ул идеаль ҡатын-ҡыҙ. Ҡартлыҡ мөхәббәттән һаҡламай, әммә мөхәббәт ҡартлыҡтан һаҡлай.*

*БЕР СЕР*

# ЙӘМҺЕҘҘӘР БУЛМАЙ...

## ялҡауҙар ғына бар



**Мода һәр саҡ үҙгәреп тороусан, хәҙер классик һаналған әйберҙәр ҙә ҡасандыр бөтәһен дә шаулатып ингән яңылыҡ булған. Кешеләрҙең кейенеү рәүеше, үҙен тотошо нисек кенә төрләнһә лә, классика бер ҡасан да актуаллеген юғалтмаясаҡ. Һәр модельер өсөн тап ошондай мәңгелек әйберҙәр уйлап таба алыу ҙур мәртәбәлер, моғайын. Бөгөн беҙ XX быуаттың иң билдәле француз мода белгесе Коко Шанелде "мәңгелек" төшөнсәһенә тап килгән классик кейем уйлап табыусы булараҡ миҫалға килтерә алабыҙ. Ул ҡатын-ҡыҙҙар гардеробына бәләкәй генә ҡара күлдәк һәм биле беленеп торған жакет индереүсе булараҡ билдәле. Иң мөһиме, "Тайм" журналы мода тарихында булған шәхестәр араһынан тик Коко Шанелде генә XX быуаттың иң абруйлы кешеләре исемлегенә индерә. Заманына күрә бик алдынғы ҡарашлы ҡатындың уйлап тапҡан кейемдәре, хушбуйҙары брендҡа әүерелһә, әйтеп ысҡындырған һүҙҙәре афоризмдарға әйләнгән. Шуларҙың бер нисәүһен һеҙҙең иғтибарға ла тәҡдим итмәксебеҙ:**

● Ҡатын-ҡыҙҙың эше ни тиклем хөрт булһа, унын ҡиәфәте шул тиклем яҡшыраҡ күренергә тейеш.

● Нисек кенә булмаһын, һәр ирҙең ғүмерендә тик бер генә ҡатын була. Ҡалғандары - унын шәүләһе...

● Ҡатын-ҡыҙ һәр ваҡыт ике нәмәне - нимә һәм кемде теләүен яҡшы белергә тейеш.

● Аҡса янсығының тинлектәр өсөн бүлеме булған ир-егеткә кейәүгә сыҡмағыҙ.

● Минең турала нимә уйлауығыҙға төкөрҙөм. Мин һеҙҙең турала бөтөнләй уйламайым.

● Әгәр ҙә һеҙ бер ҡасан да үҙегеҙҙә булмаған нәмәләрҙе булдырырға теләһәгеҙ, һеҙгә быға тиклем бер ҡасан да эшләмәгән эште башҡарырға тура килер.

● Йәмһеҙ ҡатын-ҡыҙҙар булмай, ялҡауҙар ғына бар.

● Ҡатын-ҡыҙ киләсәге тураһында кейәүгә сыҡҡансы борсола. Ир-егет кәләш алмайынса киләсәге хаҡында хафаланмай.

● Матурлығыңды ҡайғыртҡанда эште тәү сиратта йөрәк һәм күңелдән башларға кәрәк, юғиһә, бер ниндәй биҙәнеү әйберҙәре ярҙам итмәҫ.

● Косметика ҡулланмаған ҡатын-ҡыҙ үҙе тураһында саманан тыш юғары фекерҙә.

● Үпкәләгәндә үҙеңде ҡулға алыу һәм рәнйегәндә ыҙғыш сығармау - бына ниндәй ул идеаль ҡатын-ҡыҙ.

● Ҡырҡ йәштән һуң берәһе лә йәш түгел, әммә беҙ нисә йәш тулғанда ла таң ҡалдырырлыҡ була алабыҙ.

● Барыһы ла беҙҙең ҡулдарҙа, шуға ла уларҙы төшөрөргә ярамай.

● Ҡартлыҡ мөхәббәттән һаҡламай, әммә мөхәббәт ҡартлыҡтан һаҡлай.

● Кейенеү рәүешемдән кешеләр мыҫҡыллап көлә торғайны, әммә минең уңыш серем нәҡ шунда. Мин бөтәһе кеүек түгел инем.

● Ысын бәхет ҡиммәт тормай. Әгәр ҙә унын өсөн юғары хаҡ түләргә тура килһә, тимәк, был - ялған.

● Ҡанатһыҙ тыуғанһың икән, уларға үҫергә ҡамасаулама.

● Ҡулдар - ҡатын-ҡыҙҙың визит карточкаһы, муйын - унын паспорты, түштәр - сит илгә сығыу паспорты.

*ҠАТЫН-ҠЫҘ ҠОЛАҒЫНА...*

# КҮЛДӘК КЕЙӘЙЕК,

## салбарҙы онотайыҡ!



**Бөгөнгө йәмғиәттә салбар кейгән ҡатын-ҡыҙға бер кем дә аптырамай. Шулай ҙа гүзәл заттар гардеробында ныҡлы урын алған салбарға ҡарата фекерҙәр ҡапма-ҡаршылыҡлы. Ҡатын-ҡыҙҙар ҙа, ир-егеттәр ҙә үҙҙәренең позицияһын төрлө дәлилдәр менән иҫбатларға тырыша. Ҡатын-ҡыҙҙарҙың салбар кейеү яҡлы булғандары унын уңайлы булыуын һыҙыҡ өҫтөнә алһа, был фекер менән килешмәгәндәр салбарҙың кәүҙә матурлығын боҙоуына баҫым яһай. Көслө заттар араһында был кейемдәге ҡатын-ҡыҙҙы яҡлаусылар етерлек булһа ла, күлдәк кейеүсе һылыуҡайҙарҙы өҫтөн ҡуйыусыларҙың күберәк икәнлегенә шикләнмәйем.**

Мин дә бер йыл элек кенә итәк, күлдәкте инҡар итеп, салбарҙы үҙ итеүселәр рәтендә инем. Ләкин эксперимент рәүешендә генә, күлдәккә күсеүем минә ниндәй үҙгәрештәр килтерәсәгән белеү маҡсатында, салбарҙан баш тарттым. Һынау өсөн тик оҙон итәк, күлдәктәрҙе һайланым, шуға күрә һығымталарым да ошо "оҙонлоҡтан" сығып билдәләнде.

Күлдәккә күсеүем, тәү сиратта, тышҡы ҡиәфәтемде үҙгәртте. Мине һәр ваҡыт салбарҙа ғына күреп өйрәнгән дуҫым: "Күлдәк кейгәс, бигерәк күркәмленден. Һине хәҙер нәфис, яҡлауға һәм һаҡлауға мохтаж йән эйәһе итеп күрәм", - тип ишекте лә асып индерә, автобустан төшкәндә ҡулын да бирә, осраһа, сумкамды өйөмә тиклем илтеп ҡуя. Ир-егеттәр тарафынан да иғтибар бермә-бер артты. Магазинда сиратһыҙ үткәрһендәрме, транспортта урын бирһендәрме - салбар кейгән осоромда бындай күренештәр бик һирәк була торғайны. Әйтергә кәрәк, хәҙерге образым ир-егеттәргә генә түгел, үҙемә лә ныҡ оҡшай. Ни тиһәң дә, күлдәк, итәктәр салбарға ҡарағанда күркәмерәк һәм ҡарап тороуға ла күңелгә ятышлыраҡ. Ә уларҙың атлағанда күңелле генә ҡыштырлауын тойоу, елдә матур итеп елберләүен ишетеү үҙе бер кинәнес. Шулай уҡ оҙон итәктә, күлдәктә йәки сарафанда, теләйһеңме-юҡмы, сәбәләнмәй, ҡабаланмай ғына атлайһың. Был, үҙ сиратында, йөрөштө һалмағыраҡ, һығылмалы һәм нәзәҡәтлерәк итә. Ғөмүмән, күлдәкте даими кейеүем миндә ҡатын-ҡыҙ сифаттарын көсәйтте.

Салбар кейеү яҡлы булыусылар унын ҡышҡыһын йылы икәнен һыҙыҡ өҫтөнә алыр. Ләкин оҙон итәк аҫтынан махсус йылы эске кейем кейгәндә бер ниндәй һыуыҡтар ҙа ҡурҡыныс түгел. Күлдәктә йөрөргә яратҡан ҡатын-ҡыҙҙарҙың, врачтар әйтеүенсә, янбаш һөйәге дөрөҫ үҫешә икән. Тимәк, һаулыҡ өсөн дә күлдәк кейеүҙең файҙаһы ҙур. Энергетик йәһәттән дә күлдәктең ыңғай тәьҫире бәхәсһеҙ. Классик итәк, күлдәк билдән йәки күкрәк тәңгәленән аҫҡа ҡарай киңәйә. Бындай форма аналыҡта ерҙең энергияһы тупланыуға булышлыҡ итеп, ҡатын-ҡыҙға көс, характер йомшаҡлығы һәм һығылмалығы, еңеллек һәм уңыш алып килә. Тимәк... Күлдәк кейеү ғәҙәтебеҙҙе ҡуймайыҡ, әхирәттәр, тип саҡырыу бик тә урынлы булыр һымаҡ. Нисек уйлайһығыҙ?

**Зөлфиә МОСТАФИНА.**

*УҢЫШ ҠАҘАН*



# НИ ӨСӨН ҺЕҘ АУЫРЫУ ҺӘМ ЯРЛЫ?

## Байыуҙың метафизик элементы

Ысын байлыҡ рухиәткә бәйле булһа, муллыҡ менән идара итеүсе рухи ҡанундар фәнни нигеҙләнгән һәм уларҙы тойорға мөмкин; улар ҡиммәттәрҙе алмашыу схемаһы буйынса эшләй һәм кем байлыҡ тураһында хыяллана, шуларҙың барыһын да тәьмин итә. Бушлай сыр бары тик тоҙаҡта ғына була.

Донъя ғәҙәти кешеләрҙең зиһене асылып, нисек бөйөк рухи көскә эйә булыуҙары тураһында бик күп тарихҡа эйә. Будда, Ганди, Сатья Баба, Ғайса бәйғәмбәр һәм башҡалар беҙҙең сәләмәт, бай булырға һәм алға барырға тейешлегебеҙҙе раҫланы. Әгәр әле ауырлыҡтар менән осрашаһығыҙ икән, моғайын, бай булырға тейешлегегеҙ тураһындағы фекер алйотлоҡ булып тойолор. Ә бит кешенең төп тәғәйенләнеше булып, унын бай булырға тейешлеге тора. Ярлы булыу - гонаһ.

Тәүратты өйрәнһәгеҙ, унда "маҡсатҡа өлгәшмәү, яҙлығыу" гонаһтың иң тәүге аңлатмаһы итеп бирелә. Берәй ваҡыт "Мөғжизәләр тураһындағы фән" де өйрәнеү менән ҡыҙыҡһынһағыҙ, унда гонаһ - мөхәббәт етешмәүе, тип билдәләнә. Мин ике билдәләмә менән дә килешәм, сөнки шуға инанам: әгәр һеҙ байлыҡҡа ынтылмайһығыҙ икән, маҡсатығыҙҙың эргәһенән үтеп киткән кеүек, Сикһеҙ Көс тәҡдим иткән һөйөү эргәһенән дә үтеп китәһегеҙ. Йәғни үҙегеҙҙә үҙегеҙ өсөн булған мөхәббәттән мәхрүм ҡалаһығыҙ!

